# ЙӘШЛЕК

## 1. БЕҘ ХӘРБИ КЕШЕЛӘР БУЛЫП КИТТЕК

Был ваҡиға 1920 йылдың март айында булды...

Ҡалалағы бөтә коммунистарҙы, комсомолдарҙы уком комбатальонға йыйып алды. Батальон штабы ҡаланың уртаһында, баҙарға яҡын ғына бер урында, былтыр Колчак менән ҡасып киткән Самохвалов тигән бер байҙың ике ҡатлы йортона урынлашты.

Ҡалала һуғыш хәле иғлан ителде. Бөгөлмә яғынан «ҡара ҡошсолар» («черный орел») тигән исем аҫтында кулактар болаһы күтәрелеп сыҡҡан да, хәҙер улар беҙҙең ҡаланы алмаҡсы булып киләләр. Был ҡара боланың штаб тип аталған нәмәһе ҡаланан ҡырҡ километр алыҫлыҡтағы Ҡарағайлы ауылында икән, тип ишетелә.

Дөрөҫөн әйтергә кәрәк: ҡулға боевой патрондар менән винтовка алыу һәм һуғыш обстановкаһында йәшәй башлау беҙҙең рухты бик ныҡ күтәреп ебәрҙе. Беҙ һүҙҙә генә түгел, ә эштә, ысынлап та, үҙебеҙҙе революцияның һалдаттары итеп һиҙҙек. Беҙ, йәш коммунистар, теләһә ҡайһы минутта, теләһә ҡайһы яҡҡа, ниндәй генә булмаһын дошманға ҡаршы һуғышырға ынтылып тора инек.

...Беҙҙең өсөн махсус тегелмәгән оҙон шинелдәрҙең салғыйҙарын һөйрәтеп, төндәр буйы ҡала урамдарында патруль йөрөйбөҙ. Көндөҙ бер аҙ иреп тә, төнөн туңған урамдар беҙҙең аяҡ аҫтында шаулап шығырҙайҙар. Был тауыш, һалҡын ҡараңғылыҡты ҡалтыратып, тантаналы ишетелә. Уҙып барыусы һәр бер кешене алыҫтан уҡ:

— Стой! —тип туҡтатабыҙ ҙа:

— Пароль! — тибеҙ.

## 2. ЙӘШЕРЕН КОМАНДИРОВКА

Бер көндө кис мине батальон командиры иптәш Сафронов бүлмәһенә саҡырҙылар. Мин барып ингәндә, унда Сафроновтың үҙенән башҡа ВЧК начальнигы иптәш Ғимранов, Упродкомда эшләүсе матрос Тарасюк һәм беҙҙең комсомолец Сәхип Хәйруллиндар ултыралар ине.

Мин, көтөлмәгәндә саҡырылыуымдың сәбәбен белмәгәнгә, ни тип уйларға ла белмәй, аптырап, бүлмә уртаһында баҫып ҡалдым. Дөрөҫөн әйтергә кәрәк, ни ҙә булһа, берәр төрлө ярамаған эш эшләмәнемме икән, тип шөрләп тә ҡуйҙым. Ләкин Хәйруллиндың бик кәйефле йылмайып ултырғанын күргәс, тынысландым.

— Так... Ғәҙәттән тыш бер задание бар, иптәш Камалов . Ултыр, — тине батальон командиры. Ҡыҫҡа буйлы, мыҡты кәүҙәле, түңәрәк ҡыҙыл йөҙлө, һары сәс, һары мыйыҡлы кеше ине был. Тырпайып торған һары ҡаштары уның йөҙөнә асыулы ҡиәфәт биреп торалар. Ләкин ул ҡаштар аҫтынан ғәжәп күңелле итеп һоро күҙҙәр ҡарайҙар. Ул һүҙен дауам итте:

— Ҡарағайлы волосы кулактар болаһының көслө ояларынан береһе. Так... Беҙ унда отряд ебәрмәйбеҙ. Ул ояны эстән шартлатырға кәрәк. Ә бигерәк тә кәрәге, унда йыйылып та ташылмай ҡалған егерме мең ботлап иген бар. Так... Был игенде беҙ ҡотҡарырға тейешбеҙ. Байҙар әле уны туҙҙырырға өлгөрмәгәндәр. Ә отряд ебәрергә... Көстө үҙегеҙ беләһегеҙ...

— Төшөндөм, иптәш командир!—тинем мин. Миңә быңдай ҙур яуаплы задание беренсе тапҡыр бирелә ине һәм быңдай ышаныс күрһәтеүгә минең ни саҡлы шатланғанымды әйтеп бөтөрөрлөк түгел. Был шатлығымды мин нисек тә командирға белдерергә тырыша инем. Ә командир, һыуыҡ тейҙереү арҡаһында, ҡарлыҡҡан тауыш менән һүҙен бөтөрҙө:

— Бөтә йәш коммунистарҙан һеҙҙең өсөгөҙҙө һайланыҡ... ышанабыҙ һеҙгә... Так... Тарасюк иптәштә хәҙер конкрет план да бар. Ике көндән сығаһығыҙ. Бына документтар...

Урта буйлы, нескә кәүҙәле, ябыҡ, шаҙра йөҙлө ВЧК начальнигы, йылмайып, Хәйруллин менән минең яурынға ҡулдарын һалды ла, беҙгә сиратлап ҡарап:

— Бына, шулай! — тине. Ғимрановты мин ВЧК-ла йыш күрә торғайным. Ләкин унда ул бик йыраҡ, серьёз, хатта асыулы ҡиәфәтле була. Ә быңдай йылмайыулы, простой һәм дуҫтарса ҡарашын мин беренсе тапҡыр күрҙем. Мин уның эшенең бик ауырлығын, йоҡоһоҙ, ялһыҙ эшләүен хәтерләнем. Ул миңә үҙ туғаным һымаҡ яҡын тойолдо.

— Һаҡ булығыҙ!— тине ВЧК начальнигы, беҙ бүлмәнән сыҡҡанда.— Үҙ башығыҙ тураһында онотмағыҙ. Кулак, мулла — мәкерле була! Минең янға инеп сығығыҙ, ҡайһы бер кәңәштәр алырһығыҙ.

## 3. МАТРОСТЫҢ ПЛАНЫ

Залға сығыу менән, беҙҙе иптәштәр тирәләп алдылар. Ашығып һораша башланылар:

— Эш ниҙә ҡалды?

— Сафронов ни һөйләй?

- Һуғышҡа китәбеҙме әллә?

Беҙ бер-беребеҙгә ҡарашып алдыҡ: әйтергә ярамай бит хәрби серҙе. Матрос, киң йылмайып, бышылдап тиерлек әкрен тауыш менән:

— Слушай, хлопцы!— тине. Егеттәр тығыҙ түңәрәк булып йыйылдылар. Ҡыҙыҡлы берәр нәмә ишетмәксе булалар. Ә матрос:

— Хәрби сер был! Һуңынан белерһегеҙ әле!— тип ҡырт ҡына өҙҙө лә ҡуйҙы.

Беҙ өсәүләп бер тыныс бүлмәгә инеп ултырҙыҡ. Тарасюк үҙенең планын һөйләп бирҙе:

— Беҙҙең һәр ҡайһыбыҙ үҙенә яңы профессия һайлап алырға тейеш. Пример өсөн мин быяласы була алам.. Ярты юлғаса бергә барырбыҙ ҙа, Михайловка ауылына еткәс, тәүҙә мин сығып китермен, һеҙ икенсе көндө барырһығыҙ... Дөрөҫмө? Курсты фронтовиктарса тоторбоҙ. Иң батырҙарынан ун йәки ун биш кеше йыйып алһаҡ, көтөлмәгәндә волосты баҫып алырға етәсәк. Иң тәүҙә пулеметтарын ҡулға төшөрөргә тырышырбыҙ... Дөрөҫмө, братва?

Хәйруллин менән беҙ аптырабыраҡ ҡалдыҡ: ниндәй яңы һөнәр һайларға? Был өйәҙ халҡы «ҡырҡ тартмасы» йәки «ҡырлайсы» тип йөрөтә торған ваҡ спекулянт булып китергәме? Йә булмаһа...

— Булды,— тип ҡысҡырып ебәрҙе Хәйруллин.— Беләһеңме, беҙ өр-яңы бер һөнәргә өйрәнеп китәбеҙ: ул мине етәкләп ишеккә табан йүгерҙе.

### 4. „ВАҠ БУРЖУА СТИХИЯҺЫ"

Беҙ урам буйлап бик ашығып барабыҙ. Мин Сәхиптән түҙемһеҙлек менән:

— Ҡайҙа алып бараһың һин мине? — тип һораным. Ул серле йылмайып яуап бирә:

— Бер нисә минуттан үҙең дә күрерһең...

Март айының аҙағындағы ҡояшлы яҙ тураһында хәтерләтеүсе, күҙҙе сағылдырғыс бер көн. Өй түбәләренән беренсе тамсылар тама. Тротуарҙарҙа малайҙар ҡысҡырып коньки шыуып йөрөйҙәр. Сырҡылдашып көлөп, ҡыҙҙар уҙып китәләр. Ҡыш буйына ат тояҡтары аҫтында киртләс-киртләс булып боҙолған юлдан туҡылдап саналар үтәләр.

Беҙ баҙарға килеп сыҡтыҡ. Унда шау-шыу, ығы- зығы. Иҫке-моҫҡо кейем-һалымды беләгенә һалып алған кешеләр ошондай урындар өсөн хас булған специфик жаргонда бына был ағас сиркәү, ана теге күпер йәки ана ундағы лавкалар кеүек үк иҫкереп бөткән һүҙҙәрҙе ҡысҡыралар:

— Тейәре генә ни хаҡ?..

— Илле мең һорайым, ҡырҡ һигеҙгә бирәм...

— Мәңге рәхмәт әйтерһең, туғанҡай, тауары ниндәй!

Битен һытҡы баҫып бөтөргән оятһыҙ ҡарашлы бер йәш кеше:

— Сахарин! Сахарин!—тип ҡысҡырып йөрөй.

— Ваҡ буржуа стихияһы,—ти Сәхип.

Бер диуананың «мөнәжәт» әйтеүе, иҫерек татар мещанының үҙен бер кем дә тотмаған булһа ла «ебәрегеҙ, ебәрегеҙ мине!» тип ҡысҡырыуы, тирә-яҡтағыларҙың бынан ни өсөндөр шарҡылдап көлөүе, сахаринсының оятһыҙ тауыш менән ҡысҡырып йөрөүе,— былар барыһы бергә ҡушыла ла был урынға күнекмәгән кешенең күңелен болғата, ерәндерә, башты әйләндерә.

— Ваҡ буржуа стихияһы,— тип ҡабатлай Сәхип.

Ул мине төрткөләп баҙар аша алып бара. Беҙ шулай баҙарҙы үтеп бара инек инде, бер урында, ҙур ғына өйкөм булып йыйылған кешеләрҙең уртаһында берәүҙең ҡулдарын бутап:

— Зәки батша ғәскәрҙәре оҙаҡламай бында киләсәк: Ҡарағайлы улар ҡулында, большевиктарға шабаш!— тип ҡысҡырғаны ишетелде. Беҙҙең бер иптәш килеп сыҡты.

— Сабыу аҫтында обрезы бар сволочтың!—тине ул.— Тоторға ине үҙен.

Сәхиптең күҙҙәре йылтыранылар. Ул ҡыҙарынды, нервыланып уң ҡашы һикереп ҡуйҙы, һул күҙе ҡыҫыла төшкәндәй булды.

— Әйҙәгеҙ, тотабыҙ!—тине ул һәм, халыҡ өйөмөн йырып, теге кеше яғына ташланды. Беҙ теге иптәш менән уның артынан ҡалманыҡ. Спекулянттарҙан берәү:

— Комсомолдар килә!— тип ҡысҡырып ебәрҙе. Теге «ораторға» етергә өс-дүрт кенә аҙым ҡалғайны, баҙар кешеләре уны үҙҙәренең арттарына йәшерҙеләр, юҡ булды. Беҙ уның тик ҙур түгел ҡарағусҡыл йөҙөндә бер генә күҙенең тишерҙәй булып сәнсеп ҡарағанын, икенсе күҙе урынында күҙ соҡоро ғына ҡот осорғос ҡыҙарып торғанын күреп ҡалдыҡ. Ғәжәп етеҙ хәрәкәтле ине был кеше. Беҙҙе күреү менән, ул ялт итеп ҡалды. Тығыҙ дүңгәләк булып уратып алған халыҡ өйкөмөн йырып, тегене эҙләп ҡараһаҡ та, ул күренмәне.

Тирә-яҡтағы толчоксылар, мыҫҡыл итеп көлөп, беҙгә ҡарап торалар.

Улар бер һүҙ ҙә әйтмәйҙәр, тик ыржайған, ҡыйшайған уҫал йылмайыуҙан боҙолған йөҙҙәр дошманлыҡтарын йәшермәйҙәр. Беҙҙең арттараҡ бер ҡалын тауыш:

— Сволочтар! Йәшерҙеләр бит контрҙы! — тине.

Әйләнеп ҡараһаҡ, беҙҙең артта бер нисә эшсе тора ине. Улар, депо эшселәре булып, эштән ҡайтып баралар булһа кәрәк, — өҫтәрендә ялтырап бөткән ҡара, майлы эш кейеме ине.

— Эт! — тип мығырҙанды Сәхип һәм беҙ, бер контрҙы тота алмауыбыҙға күңелһеҙләнеп, үҙ юлыбыҙға киттек. Ул арала беҙҙең бер взвод, килеп, баҙарҙы тарата башланы. Сөнки ҡалала военный хәл ине. Беҙҙең күңел аҙыраҡ күтәрелгәндәй булды.

Баҙарҙың бер яҡ ситендә гармун, сәғәт төҙәтеүселәр, парикмахерҙар рәтендә самауыр, ҡомған кеүек нәмәләр төҙәтеүсе бер

ҡарттың мастерскойы бар ине. Сәхип мине туп-тура шунда алып барҙы. Сәхип уға:

— Беҙ бөгөн кис һиңә самауыр төҙәтеү эшенә өйрәнергә киләбеҙ, Ҡорбан ағай, — бер төн эсендә өйрәнергә тейешбеҙ. Аҡсаһын мул түләрбеҙ, — тине.— Ләкин быны бер кем дә белмәһен...

Ҡорбан ҡарт, эшләп ултырған еренән башын күтәреп, йәшләнеп торған күҙҙәре менән беҙгә ҡараны. Уның йөҙө йыйырсыҡтар менән йыйырылып бөткән, һирәк һәм ҡыҫҡа һаҡалы ағарған. Яртылаш асыҡ ауыҙынан өс-дүрт кенә һары тештәре тырпайып торалар. Ул һис нәмә һорашмай, ғәмһеҙ тауыш менән:

— Ярар, — тине һәм тағы ла эшенә тотондо.

## 5. ДУҪТАР, ИПТӘШТӘР...

Бөгөн политзанятие булды. Маркс һәм Энгельстың «Коммунистар партияһы манифесын» өйрәндек.

Занятиеның аҙағына Укомпарт председателе иптәш Михайлов килде. Ул фронттағы хәлдәр тураһында һөйләй башланы

— Беҙҙең данлыҡлы ҡыҙыл ғәскәребеҙ, ғәйрәтле батырҙар — Сталин, Ворошилов, Буденный етәкселеге аҫтында Врангелде Ҡара диңгеҙгә ҡыҫырыҡлайҙар. Ләкин хәҙергә әле дошмандың бөтөрөлгәне юҡ. Беҙ, бөтә көсөбөҙҙө туплап, яуыз дошман барон Врангелгә һуңғы ударҙы бирергә тейешбеҙ...

Доброволец булып яҙылыу өсөн беҙ өҫтәлде тирәләп алдыҡ. Минең эргәмә генә беҙҙең берҙән-бер комсомолкабыҙ Клавдия Малиновская килеп баҫты.

— Һин нәмә, Клава? — тинем мин.

— Һин нәмә булһаң, мин дә шул!—тине Клава дуҫтарса яғымлы йылмайып.

Уның күҙҙәре миңә ҡаранылармы — мин юғалам да ҡалам. Уға табан ҡарай алмайым. Йөрәк йышыраҡ тибә башлай. Ул үҙе миңә ҡарамаһа, мин уға ҡомһоҙланып ҡарайым. Уның хәрби фуражкаһы аҫтынан сығып торған сәс бөҙрәләренә тиклем шундай һөйкөмлө, шул бөҙрәләргә ҡулды саҡ ҡына тейҙереп һөйөргә ине, тигән теләкте тыйып тотоуы ла ҡыйын. Уның үҙенә килешеп торған ҡараға һуҡҡан кескәй генә полушубкаһын ҡабартып тороусы ҡалҡыу күкрәге минең алға баҫҡан Сәхиптең беләгенә тейеп тора. Шул уҡ ваҡытта ул, йылмайып, Сәхиптең күҙҙәренә сумырға тырышҡан кеүек, текләп ҡарай. Беҙ беләбеҙ — Клава Сәхипте яратып йөрөй. Ә мин көнләшәм һәм үҙемде бик насар, йәмһеҙ, бер тингә лә тормаған кеше итеп һиҙәм. Ләкин был хисте нисек тә тиҙерәк ҡыуып ебәрергә тырышам, һәм аҙаҡтан күңелдә көнләшеү урынына ниндәйҙер нескә ауыртыныу, үкенес тойғоһо ғына, һүнеп барған утлы күмер һымаҡ, көйрәп ҡала.

Ләкин мин үҙемдең был хистәрем тураһында уның үҙенә лә, башҡа кешегә лә әйтмәйем. Яратыу тураһында уйламай торғандыр ул ҡыҙ.

Уның тормошо бик күңелленән түгел. Ул ҡалалағы атаҡлы врач Малиновский ҡыҙы. Ҡазан университетының медицина факультетын бөтөрә алмайынса ҡайтҡан. Йәш коммунистар союзына яҙылған өсөн, атаһы уны өйөнә индермәгән. Ә бит ата-әсәне ташлап китеү еңел эш түгелдер ул!

Был ҡыҙҙы беҙгә ни нәмә тартып килтергән? Бай, комфортлы, ата-әсәһенең иркәләүе менән уратып алынған тормошто ташлап, беҙҙең ауыр шарттарға, бәлки, үлемгә лә риза булырға уны ни нәмә мәжбүр иткән?

Беҙ, исмаһам, башҡа мәсьәлә. Беҙ тормоштоң төбөнән күтәрелгәнбеҙ. Беҙҙең кешелек достоинствоһын беҙгә революция ғына

ҡайтарып бирҙе. Революция беҙҙең үҫешебеҙ. Беҙ хеҙмәт кешеләре өсөн яҡты, бәхетле тормош төҙөү идеяһы менән һуғарылғанбыҙ.

Был — бай врач ҡыҙы Клаваның йәш коммунистар союзына алыуҙы һорап яҙған ғаризаһында ошондай һүҙҙәр бар ине:

- ...«Мин Ҡазанда ук инде йәштәр ойошмаһында торғайным. Беҙ, ҡасандыр Владимир Ильичты ҡыуған университет йәштәре, үҙебеҙҙе Ленин эшенә арнаныҡ. Беҙ Ленин иптәштең бик күп әҫәрҙәрен өйрәндек, Ленин һүҙҙәре тәрбиәләне беҙҙе.. Улар иҫке тормошто бөтә йөрәк менән дошман күрергә, алға, яңылыҡҡа ынтылырға өйрәттеләр беҙҙе...»

Бына ниндәй кеше ине ул Клавдия Малиновская. Шуға күрә беҙҙең бөтә батальон уны бик ҡәҙерләп тота.

Комбат иптәш Сафронов беҙҙең рота алдында бер ваҡыт шундай телмәр тотто:

— Иптәш Малиновскаяны һәр кем Клавдия Николаевна тип йөрөтөргә тейеш. Ул беҙҙең барыбыҙҙың да туғаныбыҙ! Аңланығыҙмы, иптәштәр?

— Уны ла аңламағас!

Врангелгә ҡаршы китергә доброволец булып яҙылмаған бер генә лә кеше ҡалманы, ләкин бөтә батальондан ни бары ун ғына кеше алынды. Беҙҙе шунда списоктан һыҙып ташланылар. Беҙ иртәгә иртүк үҙебеҙгә тапшырылған эш менән китергә тигән бойороҡ алдыҡ. Бөтә нәмә әҙер Беҙгә йөҙәр патрон менән «маузерҙар» бирҙеләр. Ошо ҡорал көсө менән беҙ өйәҙебеҙҙәге ҡара көстөң иң көслө үҙәген туҙҙырырға тейеш инек. Мин матросҡа:

— Патрондар аҙ булмаҫмы,— тигәс, ул:

— Чудак!—тине.— Беҙ бит ҡоралды һуғышып алырға тейешбеҙ! Беҙҙе шуның өсөн ебәрәләр ҙә!

...Кисен беҙҙең «казарманың» ҡараңғы коридорында, террасаға сыға торған ишек янында һөйләшеп торған Сәхип менән Клаваны осраттым. Улар мине күрмәнеләр. Мин, ҡыҙыҡһыныуымды еңә алмай, ҡараңғы мөйөшкә йәшерендем.

— Әллә күрешә алабыҙ хәҙер, әллә юҡ...— тине Клава. Уның тауышында сикһеҙ моң бар ине. Ул бына хәҙер ҡысҡырып илап ебәрер кеүек тойолдо.— Һин миңә бер көнгә йомшаҡлығым өсөн асыуланма. Комсомол кешегә быны̣ң ярамағанын үҙем дә беләм... Яратҡас, нишләйем һуң?

Мин тәүҙә һүҙҙең ни тураһында барғанын аңламайыраҡ торҙом. Бына хәҙер Сәхип Клаваны ҡосаҡлап алыр, мин шунда көнсөлөгөмдө ҡайҙа ҡуйырмын, тип уйлап торғанда, Сәхип ҡоро ғына:

— Иҫке тормош ҡалдығы был беҙҙә! — тине.— Беҙ көрәш кешеләре...

— Һау бул!— тине Клавдия һәм баҫҡыстан ашығыс төшөп китте. Ул атлап түгел, йүгереп төшә кеүек тойолдо.

— Клавдия!—тип ҡапыл ыңғырашып ҡуйҙы Сәхип. Мин, былай йәшеренеп тыңлап тороуҙың оятын ҡайҙа ҡуйырға белмәй, үҙемде үҙем сәйнәп ташларҙай булып, һаман әле мөйөштә йәшеренеп торам. Ә Сәхип һис бер хәрәкәтһеҙ шәүлә булып минең алдымда баҫып тора. Ҡапыл ул ҡуҙғалды һәм ҡаты, ҡырҡыу аҙымдар менән атлап, үҙебеҙҙең бүлмәгә инеп китте...

Йәшеренгән хәлдә иптәштәрҙең һүҙен тыңлап тороп, әшәкелек эшләүем тураһында выждан ғазабы менән ғазапланып, үҙебеҙҙең бүлмәгә ингәндә, Сәхип бер ни ҙә булмаған һымаҡ, күңелләнеп, шашынып, ике рәтле гармунда уйнап ултыра ине. Уның бармаҡтары клавишалар өҫтөндә, ағастан ағасҡа һикереп уйнаған, ҡоштарға оҡшап,

ғәжәп матур етеҙлек менән йөрөйҙәр. Ул, үҙенең йөрәк тибешен тыңлаған һымаҡ, башын һул яҡҡараҡ һалып, күҙҙәрен ҡайҙалыр билдәһеҙ нөктәгә йүнәлткән. Бейек, аҡ маңлайына төшөп тулҡынланып торған оҙон ҡара сәс толомдары уйналған көй тактына һелкенеп ҡуялар. Ә гармун беҙгә күптән билдәле бер көйҙө уйнай, ләкин был көй Сәхиптең бармаҡтары аша нисектер өр-яңы, ҡыҙҙарса нәфис булып ишетелә. Был көйҙә йөрәкте елкендергес икһеҙ-сикһеҙ батырлыҡ та, ниндәйҙер серле моң да ишетелә. Ләкин ҡайһы ваҡыт был көй шундай шашҡын, тиле шатлыҡ тоҡандырып китә,— тыңлаусыларҙың йөҙө яғымлы, йәш йылмайыу менән балҡый. Кем белә, бәлки Сәхип был тапҡыр үҙенең уйына беҙҙең гүзәл Клава тарафынан тыуҙырылған бөйөк мөхәббәт ялҡынын һалып уйнайҙыр, шуға күрә лә халыҡтың был боронғо көйө шундай яңы, шундай яҡын, шундай үҙәк өҙгөс булып ишетелә торғандыр!..

Ә беҙ йырлайбыҙ. Беҙҙең һәр беребеҙ был көйгә үҙ хистәребеҙҙе, үҙ моңдарыбыҙҙы һалып йырлай торғанбыҙҙыр,— шулай ҙа ниндәй яҡынбыҙ беҙ бер-беребеҙгә! Был яҡынлыҡты беҙ бына ошо көслө йыр тауышында, күҙ ҡараштарыбыҙҙа күрәбеҙ.

— Дуҫтар! Иптәштәр!

## 6. ҠАРАҒАЙЛЫ АУЫЛЫНДА

Ҡояш яңы ғына күтәрелеп килә ине, беҙ, Михайловка ауылынан сығып, туң ҡар өҫтөнән туп-тура Ҡарағайлы ауылына йүнәлдек һәм, күп булһа бер сәғәттән, ауылға килеп тә еттек.

Дүрт мәсетле бер ҙур ауыл ине был. Ҡалай менән япҡан ҙур өйҙәр күп кенә. Урамдарында ҡара толоп яғаһын төшөрөп кейеп, яҡшы санаға еккән яҡшы аттарҙы саптырып, байҙар үтеп китәләр. Бик сыбар итеп

кейенгән ҡатындар осраштыра. Бер нисә урында аҡырып йырлап йөрөүсе иҫеректәр осраны.

Ләжәнкә санаға ҡырын ятып алған бер иҫерек йырлап үтте:

Әйттерәбеҙ, типтерәбеҙ,
Самогон ҡайнатабыҙ,
Ҡулда власть бар сағында
Донъяны ҡайнатабыҙ!

Бер ярлы ғына кейенгән кешене туҡтатып, беҙ:

— Нәмә, әллә бер-бер байраммы бөгөн? — тип һораныҡ.

— Тилегә көн дә байрам,— тине теге кеше асыулы итеп һәм, туҡтап тормай, юлында булды.

«Фатир» итеп, ауыл кешеләре беҙгә Сарим тигән бер кешенең өйөн тәҡдим иттеләр.

Төрлө ваҡ-төйәк инструменттар тултырылған зур түгел йәшникте, Сәхиптең гармунын һәм башҡа төрлө кәрәк-яраҡтарҙы күтәреп, иҫкергән, ҡаҡшаған «ҡалай ҡапҡанан» ингәндә, мин ҡапҡаны, һиҙмәҫтән, нығыраҡ бәреп яптым. Ҡапҡаның бағаналары, ҡоймаһы — барыһы тотош һелкенеп ҡуйҙылар.

Йортҡа инеү менән, уң яҡта, күп ямғырҙарҙы, ҡарҙарҙы башынан үткәргән, таҡта түбәһе мүкләнгән, стеналары көл һымаҡ һоро төҫкә инеп нык иҫкергән ҡуш өй; һул ҡулда буяуын юғалтып, йәнселеп бөткән ҡалай түбәле таш амбар; был амбарҙың бер нисә урында нигеҙ таштары төшкән, ҡалын тимер ишек ҡыйшайған һәм бикһеҙ генә ябыҡ тора. Ҡаршыла, башҡа ҡаралтылар кеүек үк, иҫкергән «мал өйө» һәм аҙбарҙар күренә. Өйҙән мал өйөнә һәм аҙбарға бара торған тар ғына һуҡмаҡты иҫкә алмағанда, йорттағы ҡар тапалмаған. Ҡар өҫтө ел һепереп

килтергән һалам кисәктәре һәм мөрйәнән сыҡҡан ҡором менән бысранған. Күренеп тора — был өйҙә һалам яғалар булһа кәрәк.

Ишек алдында беҙҙе өҫтөнә туҙған буҫтау тышлы толоп кейгән кеше ҡаршы алды. Беҙ шунда уҡ уға килеүебеҙҙең маҡсатын аңлатып бирҙек. Ул ҡарлыҡҡан, зәғиф тауыш менән:

— Ярай, инегеҙ,— тине.

Толобон һалғас, беҙ был кешенең уртаса буйлы, яурындары мөйөшләнеп торғанябыҡ тәнле, чахотка арҡаһында ағарып кибешкән, ә бит һөйәктәре ослайып сығып торған йөҙлө икәнен күрҙек. Уның башы ҙур, ҙур ғына күҙҙәре кешегә туп-тура итеп ғәжәп яғымлы ҡарайҙар. Бер нисә генә аҡ сәсенә һәм күҙ тирәһендәге йыйырсыҡтарына ҡарағанда, был кешегә 38 йәштәр самаһы булырға тейеш.

— Самауыр төҙәтеп йөрөйһөгөҙмө? — тине ул һәм тирә-яғына ҡарап, ҡыҫҡа ғына ҡара сәстәрен уң ҡул усы менән һыйпап: —ултырып тороғоҙ,— тип өҫтәне.

Мейес алдында ут яғып, бешеренеп йөрөүсе мыҡты кәүҙәле, һимеҙ ҙур йөҙлө, һары ҡашлы ҡатын, ҡатылыҡлы итеп:

— Ауылда башҡа фатир бөткәнме ни!—тине.— Тоталар ҙа ошонда ебәрәләр. Юрый ебәрәләр, беләм мин уны...

Өй хужаһы кеҫәһенән бер сепрәк киҫәге сығарып йүтәлләп алды ла, ғәмһеҙлек менән:

— Ярай, ҡунһындар. Ни була? — тине. Ул беҙгә ташландыҡ хәлгә килгән тиерлек иҫке мал өйөн күрһәтте лә:

— Мейесен яғып ебәрһәгеҙ, йылы булыр. Шунда эшләрһегеҙ,— тине. Беҙ, әлбиттә, риза булдыҡ.

Беренсе көндө үк беҙҙе эш менән күмеп ташланылар. Беҙ был һөнәрҙе атабыҙҙан мираҫ итеп алғандай серьез төҫ һәм күңел биреү менән эшләй инек.

Икенсе кис ҡунырға әҙерләнгәндә, Сәхип, ике рәтле гармунды тоҡтан сығарҙы ла уйнап ебәрҙе. Гармун тауышына тәүҙә хужа үҙе килде. Ул, ишек төбөндәге бер бүрәнә башына ултырып, йыш ҡына башын һыйпаштырып, тауыш-тынһыҙ оҙаҡ тыңлап ултырҙы. Сәхип аҙаҡ, арығандай булып, уйнауынан туҡтағас, Сарим ағай моңһоу йылмайып:

— Матур уйнайһың икән, егет! — тине — Минең ғүмеремдә был тиклем матур уйнағанды ишеткәнем юҡ ине.

Күп тә үтмәне беҙҙең «мастерскойға» оҙон буйлы, киң күкрәкле, аҙ ғына бөкөрәйөп торған арҡалы, ғәжәп матур аҡ йөҙлө бер кеше, бер ағас аяғы менән дөпөлдәп, килеп инде. Инеү менән ул башындағы һалдат фуражкаһын алып:

— Һаумыһығыҙ әле! — тине, тигеҙ, аҡ тештәрен күрһәтеп йылмайҙы.

— Ултырып тор, урын тапһаң! — тине хужа.

— Табылыр...— тине теге һәм үҙе һаҡ ҡына ҡыланып, ағас аяғын алға һуҙып, ишек янында торған иҫке һандыҡ өҫтөнә ултырҙы. Фуражкаһын таҙа аяғының тубығына һалып, киң ҡулдары менән уны һыйпаштырырға тотондо.

Сәхип гармун уйнауҙан туҡтаны, хужанан башҡалар барыбыҙ ҙа тәмәке төрә башланыҡ. Бер ҙә тартынып тормай торған беҙҙең яңы танышыбыҙ Сәхиптең тәмәке тоҡсайына үрелеп:

— Ҡана, егет, урат әле берҙе,— тине. Ул оҫталыҡ менән «кәзә сыйрағы» ураны, бик нәфис, һаҡ итеп тәмәке тултырғандан һуң, алмаш-тилмәш барыбыҙға ла ҡараштырып, һүҙендә дауам итте.— Гармун тауышы ишеткәс, аптырап киттем. Күптән инде беҙҙең йыр, уйын

ишеткәнебеҙ юҡ. Көн дә талаш, ҡысҡырыш, үлтереш. Бөгөн тыныс ҡына йоҡлайым инде, тип ятһаң, дөбөр-шатыр уятып, сходҡа алып китәләр...

Был кеше һөйләшергә ярата торған һәм һөйләр нәмәһе күп булып сыҡты.

— Мине артиллерист Яшка тип йөрөтәләр, ысын исемем Яҡуп. Бына, Колчакка ҡаршы һуғышҡанда, былтыр аяҡты өҙҙөрөп ҡайттым. Был һуғышты, үлтерештe бөтөрҙөк инде тип торһаҡ, бына был эт ауыҙҙар күтәрелеп сыҡтылар...

Ул ауылдағы хәлдәр тураһында тәрән ризаһыҙлыҡ, сикһеҙ дошманлыҡ менән һөйләп китте. Байҙарҙы, муллаларҙы уның асыҡтан-асыҡ һүгеүенә аптырашып, беҙ Сәхип менән бер-беребеҙгә ҡарашып ҡуйҙыҡ. Ул беҙҙең ҡарашты аңлап алды, шунда уҡ:

— Өсөнсө көн бында, һеҙҙән алда ғына быяласы бер хохол булды,— тине. Сәхип менән беҙ икебеҙ ҙә бер үк ваҡытта:

— Ни әйтте? — тип алдан билдәләп ҡуйылған серле һорауҙы бирҙек. Беҙҙең сиктән тыш шатланыуыбыҙға ҡаршы артиллерист, йылмайып, беҙ көткән яуапты бирҙе:

— Эш табыла икән,— тине.

Был «Эш табыла икән» тигән һүҙ беҙҙең пароль ине һәм ул һүҙҙе әйткән кешене беҙҙең кеше, тип иҫәпләргә кәрәк ине. Мин һикереп тороп артиллеристың ҡулын ҡыҫайым тиһәм, хужа алдында был килешмәҫ кеүек тойолдо. Сөнки, хужаны беҙ әле белмәй инек.

— Һеҙ рәтле егеттәр күренәһегеҙ,— тине артиллерист,— әйҙәгеҙ, миңә инеп ултырығыҙ, һөйләшел ултырырбыҙ.

Беҙҙең хужа һүҙгә ҡыҫылмай, ҡулына һалам йәки сыбыҡ киҫәге һалып, шуның менән булып, йәки башын һыйпаштырып тик ултырҙы. Ниндәй уйҙар уйлай икән был кеше? Ғөмүмән, ниндәй кеше ул?

Серле кеше ине беҙҙең хужа. Унда ниндәйҙер интеллигентлыҡ, бына был ауыл мөхитенә сит булған нәмә аңҡый.

Артиллерист Яшканың беҙҙе саҡырыуына ҡарата ла һис бер һүҙ әйтмәне. Тик артиллерист:

— Әйҙә, Сарим күрше, беҙгә инәйек,— тигәс кенә, ул үҙенең ғәҙәттәге ғәмһеҙ тоны менән:

— Рәхмәт... Мин библиотекаға барайым әле,-- тине. Был һүҙ беҙҙе тағы ла ғәжәпләндерҙе. Тимәк, был кеше библиотекарь. Был ауылдың интеллигенты.

Беҙ артиллерист артынан урамға сыҡтыҡ. Ҡапыл урамдың бер яҡ башында, төнгө тынлыҡты ярып, бик ҡысҡырып һөйләшкән тауыштар, март кисенең һалҡынында шығырҙаған аяҡ тауыштары ишетелде.

## 7. МӘҘИНӘ

Көнбайыш яҡта киске шәфәҡтең һуңғы яҡтылығы аҙ ғына беленерлек булып горизонтта бер аҙ ағарынып тора. Яртылаш ҡараңғы урам буйлап кеше шәүләләре ҡуҙғалалар. Улар күптәр. Бөтә урамды иңләп киләләр. Беҙ барыбыҙ ҙа ирекһеҙҙән ҡапҡаға таба ташландыҡ.

Кешеләр төркөмөнөң уртаһында "Ҡунаҡ санаһына" егелгән ат эргәһенән абына-һөрөнә атлап бер фигура килә. Уның ҡулдары артҡа бәйләнгән. Кейеменә, оҙон сәстәренең яурындарына төшөп тороуына ҡарағанда, был кеше ҡатын-ҡыҙ булырға тейеш. Дөйөм буталсыҡ, болалар, ярһыулы геүләү эсенән кемдеңдер ҡалын тауышы:

— Былай йөрөткәнсе, һуғырға ла үлтерергә ине булмаһа,— тип ҡысҡырҙы. Минең эргәлә торған артиллерист төшөнкө, һыҙланыулы тауыш менән:

— Тағы кемде язалайҙар икән инде был эт ауыҙҙар!— тип мығырҙанды.

Ул арала кемдер беҙҙең янға йүгереп килде лә, хужаға:

— Ни ҡарап тораһың, Сарим, Мәҙинәңде, ҡарап тороп, үлтертмәксе булаһыңмы ни? — тип бышылданы. Артиллерист бер үк ваҡытта ҡайғылы ла, үкенесле лә, сикһеҙ тәрән асыулы ла тауыш менән:

— Мәҙинәме ни? — тип һораны.

Сарим ағай тертләп киткән кеүек булды, һис бер һүҙ әйтмәй, ҡапыл урамға, ҡоторонған, шаулаған, олоған толпа яғына ташланды.

Болдорҙа ҡатындың ҙур кәүҙәһе күренде Ул Сарим ағайҙы беҙҙең янда, ҡапҡа төбөндә тип белеп булһа кәрәк:

— Әй, һин, ин өйгә! Тағы күпме көттөрөрһөң икән? — тине. Һәм аҡрыныраҡ: — Әҙәм аҡтығы,— тип өҫтәне лә өйгә инеп китте. Был ваҡытта беҙ ҡуйыра барған ҡараңғылыҡта ат эргәһенә бәйләнгән ҡатын-ҡыҙ фигураһы янында Сарим ағайҙың бөршәйгән, ослайып торған яурынлы ябыҡ кәүҙәһен күреп ҡалдыҡ. Шул уҡ секундта уның өҙгөләнеп сыҡҡан, ҡарлыҡҡан һымаҡ тауышы ла ишетелеп ҡалды:

— Кешелегегеҙ ҡайҙа һеҙҙең? Әсе бер тауыш:

— Бәйләгеҙ ағаһын да,— тип, ҡараңғы һалҡын һауаны ярып ебәрҙе. Толпа туҡтаны. Уртала ниндәйҙер ығы-зығы башланды. Кемдер:

— Саримдың ни зыяны бар, ҡарттар? — тип ҡысҡырҙы.

— Саримды ла һәләк итәләр инде былар,— тине артиллерист, үҙе шәп-шәп атлап китеп барҙы. Ул арала толпа ҡуҙғалды. Беҙ ҙә артиллерист артынан киттек. Ентекләберәк ҡараһаҡ, беҙҙең хужаның да ҡулдарын артҡа бәйләгәндәр ҙә шул уҡ егеүле аттың икенсе яғына таҡҡандар. Артиллерист бышылдап ҡына беҙгә:

— Мәҙинә икән шул,— тине.— Һеҙҙең хужағыҙҙың туған һеңлеһе, һуңғы ваҡытта Волревкомдың секретары булып эшләне. Ҡайҙалыр ҡасҡан тигәйнеләр, тапҡандар икән бахырҙы...

Шау-шыулы, кемдең ни һөйләгәне билдәһеҙ рәүештә геүләгән, олоған толпа ауылдың бер яҡ ситендәрәк торған бер нисә ҙур өйҙөң береһенә ябырылды. Сәхип менән беҙ ҙә тырышып-тырмашып толпа менән бергә ҙур ғына залға индек. Был Ҡарағайлы Волость правлениеһы йорто ине. Ҡулдары артҡа бәйләнгән ике кешене стеналарҙың береһенә һөйәп ҡуйҙылар. Түшәмгә аҫылған егермеле лампа яҡтыһында Мәҙинәнең һыҡҡан сепрәк кеүек ағарынған матур йөҙө, өҫкә ҡалҡып торған ҙур ҡара күҙҙәре һәм яурынына төшөп торған оҙон ғына ҡара сәстәре асыҡ күренде. Беҙҙең артта кемдер шыпырт ҡына:

— Йәрмәт ауылына килеп еткәнсе туҡманылар...— тине.

Ләкин уның ҡарашында һис бер өмөтһөҙлөк, кәрһеҙләнеү, ялыныу билдәләре күренмәне. Киреһенсә, ул ҙур күҙҙәрен ҡайҙалыр текләгән дә, ғәжәп ҡаты, ғорур һәм хатта ғәмһеҙ кеүек ҡарап тора. Тик ҡайһы ваҡыт ул йоморо матур яурындарын ҡыймылдатып ҡуя, аяҡтарын алыштырып баҫа, һәм, ҡайһы ваҡыт, йөҙө, ниҙәндер ерәнгән һымаҡ, бик ныҡ боҙолоп, һытылып ҡуя. Был ауыртыу билдәһе ине. Уның сикәһенән ҡолағына яҡын бер урынынан эйәк аҫтына, муйынына ҡып-ҡыҙыл таҫма һуҙылған, ҡан ҡара-ҡыҙыл түҫкә инеп ҡатҡан.

Ҡыҙҙың урта буйлы көслө фигураһы янында Сарим ағай үҙенең хәлһеҙ, таралып төшөр кеүек тойолған күгәргән тире эсендә ҡоро һөйәктәрҙән генә торған кәүҙәһе менән сиктән тыш ҡыҙғаныс булып тора. Ләкин уның да күҙҙәрендә, ҡыҙҙағы һымаҡ, ҡатылыҡ, ғорурлыҡ йәки үҙ һүҙлелеккә оҡшаған ниҙер, балҡып, уға көс биреп тора.

Яҡтыға килеп ингәс, кешеләр шау-шыуҙан тынып ҡалдылар. Бер-береһенең йөҙҙәрен һәм ана ул стена буйында торған ике кешенең ҡиәфәттәрен күреү был үҙенең ҡылған эштәре тураһында үҙенә һис бер төрлө хисап биреп тормаған, стихия һөрөмөнә иҫергән боласы толпала

кешелек тойғоларын уятҡан кеүек булды. Әйтерһең, кешеләр үҙҙәре эшләгән ҡот осорғос аҡылһыҙлыҡтан үҙҙәре оялалар...

Ләкин был хәл оҙаҡҡа барманы. Эстәге бүлмәләрҙең ишегенән ныҡ ҡына иҫкергән офицер кейемендә урта буйлы, танау аҫтынан аҙ ғына ҡалдырып ҡырған мыйыҡлы, асыҡ зәңгәр күҙле, тырпайып торған ҙур ҡолаҡлы, битен һыҫҡылар баҫып бөтөргән 30 йәштәр самаһындағы бер етеҙ хәрәкәтле кеше сыҡты. Беҙгә яҡын ғына:

— Үҙе сыҡты!

— Атаман Имаҡай үҙе бында икән,— тип бышылдап ҡына әйтелгән һүҙҙәр ишетелде. Ул, шәп-шәп атлап, Мәҙинә менән уның ағаһының ҡаршыһына барып баҫты. Уның майлап тараған ҡара сәсе һәм яурындағы погондары йылтырап ҡалдылар. Ул әллә нисек мещан ҡатын-ҡыҙҙары һымаҡ борғоланып, мыҫҡыллаған тауыш менән:

— Хәйерле кис, матур туташ! Һеҙҙе борсоғаныбыҙ өсөн ғәфү итеүегеҙҙе һорайым,— тине һәм, уң ҡулындағы сигаретын ауыҙына ҡабып, Мәҙинәнең эйәк аҫтынан һыйпаны, Мәҙинә башын артҡараҡ алды.

Ул, йөҙөнә көслө ерәнеү ҡиәфәте сығарып, ҡысҡырмай ғына:

— Кит, яғынма, сволочь!..— тине. Әгәр ҡулдары бәйләнмәгән булһа, һис шикһеҙ был офицерҙы һуғып ебәргән булыр ине кеүек тойолдо.

— О-һо! — тине офицер ҡаштарын күтәреп. — Ул ниндәй батыр туташ!

Унан — йөҙөнә ҡоторонҡо уҫаллыҡ ҡиәфәте биреп, аҙ ғына эйелә төшөп, Сарим ағайға ҡараны ла:

— Ә һин, тере мәйет, кем булаһың?— тип һораны. Мәҙинә ағаһына:

— Өндәшмә шул йолкошка! — тине. Офицер капыл уға боролдо, бөтә кәүҙәһе калтыранғандай булды. Ул калтыранған түбән тауыш менән:

— А-а, стерва,— тине һәм, нык киҙәнеп, йоҙроғо менән сат иттереп Мәҙинәнең яңағына һукты. Мәҙинә күҙҙәрен акайтып аҙ ғына сайкалып торҙо ла иҙәнгә йығылды. Сарим, йүтәленә быуыла-быуыла, хырылдаған тауыш менән:

— Миңә һук исмаһам.. Канһыҙ... — тип бышылданы.

Офицер сыккан ишектә өҫтөнә «кәзәки тун» өҫтөнән ебәк елән һәм башына ҙур сәллә кейгән түңәрәк кыҙыл битле, яртылаш ағарған ҙур ғына һакаллы берәү күренде. Тирә-якта:

— Хөснулла хәҙрәт,— тип бышылдаштылар. Ул ҙур кәүҙәһен бик ауырлык менән куҙғаткан киәфәттә офицер янына килеп баҫты һәм Саримды күрһәтеп:

— Ә был йүнһеҙҙе кайтарығыҙ, офицер әфәнде. Барыбер бөгөнмө-иртәгәме үҙе сереп бөтәсәк. Уның эсендә шайтан ултыра, шул шайтаны һура уны...— тине.

Ниҙер әйтергә теләп ауыҙын аскан Сарим ағай йүтәленә быуылды. Халык араһынан:

— Правильно, кайтарып ебәрегеҙ!

— Уның бер кемгә лә зыяны тейгәне юк!

— Һеңлеһе башка, был башка!—тигән тауыштар ишетелде.

Унтер Имакаев котороноп ишек янында йыйылып торған кешеләр өйөмөнә караған хәлдә, бөйөрөнә таянып кыскырынырға тотондо:

— Ә-ә, һеҙгә әле байҙарҙың малы кәрәк булдымы ни? Һеҙ барығыҙ ҙа сволочтар! Беләм мин һеҙҙе! Ну, йолкоштар! Имакаевтарҙы беләһегеҙме? Беҙҙе еңмәксе иттегеҙме? Беҙҙе — Имакаевтарҙы?

Исхаковтарҙы? Ибраһимовтарҙы? Бирермен мин һеҙгә власть, сволочь! Таралығыҙ! Таралығыҙ, мин кемгә әйтәм! Волость правлениеһы члендарынан башҡа, жандармдарҙан башҡа, бер кем дә ҡалмаһын! — тип ҡысҡырҙы.

Яурындарына ҡуян мылтыҡтары аҫҡан (винтовкалыһы берәү генә ине) биш-алты кеше (күрәһең, «жандармдарҙыр»), толпа эсенән сығып, офицерға яҡынырaҡ барҙылар. Күп кеше ишеккә боролдо. Беҙ «жандармдарҙың» берәүһенең Сәрим ағайҙың ҡулдарын ысҡындырғанын күреп ҡалдыҡ һәм тышҡа сыҡтыҡ. Ишек алдында тәмәке тартып торған бер төркөм кешеләр араһында бәхәс бара.

— Аталары хөрмәтенә ғәфү итергә кәрәк ине уларҙы!

— Ревкомда писарь булып торған кешене нисек ғәфү итһендәр!

— Үҙе коммунислыҡҡа ла яҙылған, ти.

— Юҡ, инде, йәш кенә ҡыҙ баланы шулай аҙаплап йөрөтөү һис килешкән эш түгел!

— Үҙеңдең башың ике булмаһа, иблис ялсыларын ҡыҙғанып торма, Шәрәфи замандаш!

Беҙҙең арттан уҡ Сарим ағай ҙа килеп сыҡты. Уны ишектән төртөп, типкеләп сығарҙылар. Күрәһең, беҙ сығып киткәс, ул боласыларға бик татлынан булмаған һүҙҙәр ысҡындырғылағандыр. Беҙ уны уртаға алып ҡайтып киттек. Сарим ағай көс-хәл менән генә атлай. Ул ғыжылдай һәм әленән-әле йүтәленә быуыла. Оҙаҡ ҡына һөйләшмәй барҙыҡ. Күңелгә ауыр, ҡайғынан йөрәк ҡыҫылғандай була. Ни әйтергә лә белеп булмай, һуңынан артиллерист:

— Һеҙ юҡҡа былай йыш күренеп йөрөйһөгөҙ,— тине.— Бик уҫалдар улар...

— Һис кисекмәҫтән ҡотҡарырға кәрәк был иптәште! — тине Сәхип. Дөрөҫөн әйткәндә, бындай уй минең дә башыма килгәйне, ләкин был эште нисек башҡарыу юлы миңә әле асыҡ түгел ине. Артиллерист йәнләнеп һәм ҡыҙыҡһынып:

— Бик яҡшы булыр ине. Ләкин нисек эшләйбеҙ һуң? — тип һораны.

— Әйҙәгеҙ, тиҙерәк ҡайтайыҡ әле,— тине Сәхип, бер ҡарарға килгәндәй. Беҙ шәберәк атланыҡ.

Шул төндә үк таң алдынан матрос килеп төштө. Беҙ артиллерист өйөндә йыйылдыҡ. Тәҙрәләрҙе ҡаплап ҡуйҙыҡ.

— Мин өс ауылда булдым,— тине матрос. — Бына тигән егеттәр бар. Бында һеҙ үҙегеҙ ҡарағыҙ... Өс-дүрт көндән дә һуңламаҫҡа ине...

Сәхип ҡаты итеп:

— Иртәгәнән дә ҡалмайбыҙ! — тине.

Матрос ғәжәпләнеп ҡараны:

— Кешеләр әҙерләнеп бөтмәгән бит, братва!

— Булған тикләме етер! — тине Сәхип матросты бүлдереп.— Бер башлағансы ғына. Башлап ебәрһәк, халыҡ шунда уҡ күтәрелеп сығасаҡ. Һүҙгә артиллерист үҙе ҡушылды:

— Минеңсә, иртәгә түгел, иртәнән һуңға билдәләргә кәрәк. Ни өсөн тип әйтһәң, тап йома көн тура килә. Тегеләр мәсеткә йыйыласаҡтар. Улар Хөснулла хәҙрәт артында ойоп торған саҡта ғына, беҙгә волосты баҫып алырға кәрәк!

— Мәҙинәне уға тиклем тоторҙармы һуң улар? — тип һораным мин түҙемһеҙлек менән. Беҙ, ҡуйы томан эсендәге кеүек, ауыр тынлыҡта ҡалдыҡ.

Һис бер төрлө тәртибе булмаған был баш-баштаҡлы боласы кулактар бандаһы теләһә ҡайһы минутта бөтә төрлө этлекте эшләргә һәләтле түгелдәрме ни?

Нисек кенә уйлаһаҡ та, артиллеристың тәҡдименә күнергә тура килде, йома көн бында, ғәҙәттә, ҙур баҙар була икән. Шул баҙарҙы файҙаланып, беҙҙең яҡта буласаҡ кешеләрҙе тупларға ла һиҙҙермәҫтән волосты баҫып алырға.

Беҙҙең кешеләр берәмләп-икешәрләп йома ваҡытына волость правлениеһы йортона йыйылырға тейештәр. Унда уларҙың бер пулеметтары бар, беренсе сиратта, шуны алырға кәрәк. Был эште биш кешелек группа менән Сәхип башҡарырға тейеш. Сөнки ул беҙҙең батальонда иң яҡшы пулеметсыларҙың береһе тип һанала ине.

Шул уҡ минутта матрос, бер нисә кеше алып, боласыларҙың «атаманы» тип аталып йөрөтөлгән элекке унтер-офицер Имаҡаевты ҡулға алырға, ә артиллерист бер нисә иптәш менән барып Мәҙинәне ҡотҡарырға тейештәр. Был ваҡытта мин, баҙарҙағы халыҡ араһында митинг асып, Ҡарағайлы волосына урынлашып алған аҡгвардиясы бандиттарҙың етәкселәре ҡулға алынғанлыҡты, тағы ла советтар власы урынлашҡанын белдерәсәкмен. Хәҙерге ваҡытта волость старшинаһы булып торған Хөснулла хәҙрәтте, урядник тип атап йөрөтөлгән элекке волостный писарь Харламовты халыҡ үҙе үк тотоп бирәсәк.

Был планды эшләп, бөтә ваҡлыҡтары тураһында ныҡлап һөйләшеп ҡуйғас, беҙ үҙебеҙҙе еңеләйеп киткән һымаҡ һиҙҙек. Беҙ ҡулдарыбыҙҙы ныҡ ҡыҫышып таралыштыҡ. Матрос беҙҙең конкрет планды һәм срокты иң ышанысլы кешеләргә алдан әйтеп ҡуйыу өсөн тағы ла тирә-яҡ ауылдарға сығып китте.

— Мин баҙар көн иртүк бында булырмын, братва! — тине ул сығып киткәндә. Ләкин көтөлмәгән ваҡиғалар килеп сыҡты: беҙгә ашығырға тура килде.

## 8. „ҺӨНӘРСЕЛӘР ЭШ ӨҪТӨНДӘ"

Беҙ өс-дүрт кенә сәғәт йоҡлап алдыҡ та үҙебеҙҙең һөнәребеҙгә тотондоҡ. Беҙҙе эш менән күмеп ташланылар. Тегендә-бында ireп торбаһы ҡупҡан, йәки ҡорһағы тишелгән, йә булмаһа мороно төшкән һары иҫке самауырҙар сират еткәнде көтөп ултыралар.

Артиллеристың һөйләүенә ҡарағанда, беҙҙең турала ауылда яҡшы хәбәр таралған. Самауыр килтергән еңгәләр йәки әбейҙәр менән беҙ рәхәтләнеп, күптәнге таныштар һымаҡ, һөйләшәбеҙ. Улар беҙҙең яндан сығырға ашыҡмайҙар. Ирегән торбаһын ҡуйҙырырға килтергән бер еңгә, самауырын ҡалдырып сығып барғанда, ғәжәп яғымлы йылмайып:

— Самауырымды шундай яҡшы итеп төҙәтегеҙ,— һеҙҙең үҙегеҙ кеүек, күңелле шаулап ҡайнай торған булһын! — тине.

Бер ваҡыт, ҡолағы төшкән иҫке самауыр күтәреп ҡыҫҡа ғына буйлы, өҫтөнә иҫкереп бөткән ҡыҫҡа һары тун, башына ла иҫкергән «меҫкен бүрек» кейгән һары һаҡаллы бер кеше килеп инде. Ул бик ҡысҡырып:

— Әссәләмәғәләйкем!—тине һәм шунда уҡ самауырҙы ергә ҡуйып, үҙенә урын табып алып, яйлап ултырҙы ла, һис туҡтап тормай, һөйләп алып китте:

— Бала-саға күп, туғандар, тыйып булырлыҡ түгел! Ваталар, ҡыйраталар. Бына самауырҙың ҡолағын төшөргәндәр. Еңгәгеҙ килергә тора ине. Ҡана, мин әйтәм, үҙем барайым, бик шәп егеттәр, тип һөйләйҙәр, мин әйтәм. Күреп ҡалайым, тинем. Ә беҙ, алйоттарҙы күргәнһегеҙҙер инде үҙегеҙ! Кисә нишләне беҙҙең халыҡ? Бына тигән яҡшы ҡыҙ баланы туҡманылар. Нисек ҡулдары бара, белмәйем. Беҙҙең

ярлы халыҡтан да бар алйоттар! Байҙарҙың үсе бар советта, бай менән мулла үсен алырға тырыша. Ә беҙ крәҫтиәнгә ни ҡалған байға эйәрергә? Кисә волость алдында шулай тигәйнем, йәүләп алдылар үҙемде, әле һин большевиктар яҡлыһың икән, тиҙәр. Хәҙер һуғып йығырға торалар! Ниңә, булыр за! Һеҙ килер алдынан ғына күркә Хисам улы Шиһапты бер һүҙ өсөн туҡмап эштән сығарып ташланылар. Ҡулын һындырғандар, эшкә ярамаҫ, тиҙәр. Ни әйткән тиһегеҙ: большевиктар крәҫтиән яҡлылар бит, нишләп алйотланабыҙ, ҡарттар,— тигән. Бары бына шуның өсөн генә. Ҡасан бөтөр икән был буталсыҡ, ай- һай еләтте, туғандар! Ниндәйҙер Зәки хан килә тип һөйләйҙәр. Кисә әле теге әфисәр һөйләне... Уныһы нәмә икән тағы — ысынмы, бушмы, тигәндәй...

Ул ғәжәп ашығып һөйләй һәм һүҙ уңайына ҡулдарын бутай. Уның оҙон ғына ҡаштары аҫтынан һоро күҙҙәре простой һәм яғымлы ҡарайҙар. Был кешенең бер ҡатлы намыҫлы кеше икәнендә шик юҡ ине. Сәхип ҡапыл ғына:

— Исемең нисек, ағай? — тип һораны. Ағай беренсе минутта аптырабыраҡ киткән кеүек, хатта ниҙәндер шикләнгәндәй ҙә булды.

— Минеңме? Мине, туған, «ябалаҡ Шакир» тип йөрөтәләр, Шакир инде настаящайы ғына!

— Бына шулай эштәр, Шакир ағай!— тине Сәхип уның янына барып. Мин һиҙеп торам, ул туп-тура әйтеп һалмаҡсы була. — Һин баҙар көндө йома алдынан ғына беҙҙе күр әле, яраймы? Һин намыҫлы кешегә оҡшайһың. Мине, йәки бына, минең иптәште күр. Тағы ла бер-ике бына һинең һымаҡ үҙ ағай-эне юҡмы? Ярлыларҙан?

Шакир ағай, ниҙер аңлай башлағандай, йылмайып ебәрҙе:

— Ярай, ярай, ҡустым,— тине ул ашығып.— Донъяла, туған, намыҫлы кеше күп ул. Тик бына намыҫлы кешенең почеты булмай!

Баҙарҙа тиһеңме әле, туған? Була, ул була! Файҙабыҙ тейерлек була икән, беҙ күмәк тә булырбыҙ әле... Ҡурҡаҡлыҡ бар беҙҙә! Бына ҡарап тороп, кеше үлтертәбеҙ — ҡурҡытып алғандар байҙар беҙҙе! Башлап ебәреүсе булһа, халыҡ күтәрелергә әҙер тора!

Һәм тауышын түбәнәйтеп серле итеп ул:

— Бында, волоста, совет башлығы минең кейәү тейешле кеше ине, — Кәримовты бәлки ишеткәнегеҙ ҙә барҙыр — Барый Кәримов. Бик матур егет ине... Бына былар атып үлтерҙеләр. Имаҡаев үҙе атты, йәне йәһәннәмдә булғыры! — тине.

Шакир ағай үҙгәреп китте. Уның ирендәре ҡалтыранды. Бүркен һалып алды ла, уны ике ҡулы менән дә тотоп, әйләндергеләй башланы. Уның күҙҙәрендә йәш йылтыраған кеүек булды. Ул урынынан торҙо ла, ҡалтыранған тауыш менән:

— Ярай, ғәйепкә алмағыҙ, туғандар!—тине һәм сығып та китте... Ләкин тағы ишекте асып башын ғына тыҡты ла:

— Баҙарҙа беҙ һеҙҙе эҙләп табырбыҙ! — тине. Беҙ уның артынан тәҙрә аша күҙәтеп ҡалдыҡ. Унан һуң тағы ла эшкә тотондоҡ һәм һәр кем үҙ уйы менән булып, бер аҙ ваҡыт өндәшмәй эшләнек.

— Беҙ был кешегә әйтеп ашыҡманыҡмы икән? — тип һораным мин Сәхиптән.

— Ысындан да намыҫлы ағай булырға оҡшай,— тине Сәхип. Оҙаҡламай артиллерист килде. Беҙ уға Шакир тураһында һөйләгәс, ул, күңелле итеп, йылмайып уҡ ебәрҙе:

— Һис шикләнерлек түгел! Бына тигән кеше! Мин үҙем дә уға әйтәйем тип тора инем әле...

## 9. ЯҢҒЫҘ ҠАЛҒАН КЕШЕ

Сарим ағайҙың хәле ҡапыл насарланып китте, һуңғы ваҡиғалар арҡаһында борсолоуҙар һәм ғазапланыуҙар ғәҙәттән тыш насар тәьҫир иттеләр булһа кәрәк. Ул ятты.

Беҙ, «самауыр төҙәтеүселәр», иртәнсәк икәүләп уны хәлен белергә индек. Өй эсендәге йыуан ҡатын, беҙ тәү күреүҙә уйлағанса, Сарим ағайҙың бисәһе түгел, ә уның атаһының һеңлеһе булып сыҡты. Артиллерист был турала ҡыҫҡа ғына итеп аңлатып бирҙе:

— Сарим күршенең үлгәнен көтә. Йорт-ерҙе үҙенә алмаҡсы була. Әшәкелеккә ағаһынан уҙҙырып ебәргән... Сарим үҙе һөйләр әле, һөйләшергә ярата ул...

Шулай тигәйне бер ваҡыт артиллерист.

Беҙ барып инеү менән, был ҡатын, һис бер төрлө һүҙ өндәшмәҫтән, башына ҙур шәл ябынды ла сығып китте.

Сарим ағайҙың йөҙө тағы ла нығыраҡ күгәргән, танауы тағы ла нығыраҡ ослая төшкән, ҙур күҙҙәре тағы ла төпкәрәк батҡан һымаҡ күренде. Беҙҙе күреү менән, уның был үлем шәүләһе уйнаған йөҙөндә йылмайыу балҡып китте:

— Ултырығыҙ әле, егеттәр!—тине ул бик хәлһеҙ тауыш менән. Ҙур аҡ яулыҡты ирендәренә килтерҙе. Беҙ уның янына ғына килеп ултырҙыҡ.

— Мин һеҙҙе беләм, егеттәр,— тине.— Мин һеҙҙе ҡалала библиотекала күргәйнем, һеҙ минең серегеҙҙе белеүемә шикләнмәгеҙ! Аҙ ғына ла таҙалығым булһа, һеҙгә ҡулымдан килгән ярҙамды күрһәтер инем...

Беҙҙең серҙең былай беҙгә билдәһеҙ кешегә беленеүе беҙҙе шикләндерҙе, әлбиттә. Ләкин Сарим ағай беҙҙең эшкә нисек тә зарар яһарҙай кеше булып күренмәй ине. Ә ул, күрәһең, һөйләшергә һыуһаған

булһа кәрәк, йүтәл аралаш ғыжылдап, һулышын тәрән алып һөйләп алып китте:

— Һеҙ миңә күп һөйләү зарарлы тиһегеҙме? Барыбер үлергә бит! Мин һеҙгә шатмын. Мин һеҙгә һөйләргә теләйем, минең үткән ғүмеремдә яҡшы кешеләр бик аҙ осранылар.

...Минең атайымды «йомран Рәхим» тип йөрөтә торғайнылар. Эштән сыҡҡан наҙан, сиктән тыш ҡомһоҙ һәм ҡот осҡос үҙ һүҙле кеше ине. Ул, йәш сағынан уҡ, байыу маҡсаты менән йәшәгән. Донъяла йәшәүҙең берҙән-бер маҡсаты — мал йыйыу булған... Уға байлыҡ ни өсөн кәрәклеген, бәлки, ул үҙе лә белмәгәндер, һәр хәлдә семьяның рәтле ашағаны, рәтле кейенгәне булманы. Тамаҡты ла рәтләп туйҙырмағанға, ураҡ урырға көнлөккә кеше килмәй торғайны...

Һеңлем Мәҙинә менән икебеҙ атайыбыҙҙы һис килешә алмаҫлыҡ дәрәжәлә дошман күрҙек. Бының сәбәбе — беҙҙең атай булған кешенең беҙҙе варварҙарса иҙеүендә, бер ҡараңғынан икенсе ҡараңғыға тиклем эшләтеп тә, кешесә бер һүҙ әйтмәй, һәр ваҡыт һүгеп йөрөтөүендә һәм туҡмауында ғына түгелдер, һүгелеп, туҡмалып та донъяла ғәмһеҙ йәшәгән, «яҙмыш шулай ҡушҡандыр инде» тип, кәмһетеүҙәргә, кешелеге тапталыуҙарға риза булып йәшәүселәр аҙ түгел. Бына ошо түҙемлелек, маҡтаулы һалҡын ҡанлылыҡ кешене баҫа, хайуанлыҡҡа тарта... Ә беҙ, күрәһең, түҙергә теләмәгәнбеҙ...

...Мин, уҡыуҙы күҙ алдымда тотоп, ҡалаға ҡастым. Күп ауырлыҡтар аша «Ғәлиә» тигән мәҙрәсәгә тиклем барып еттем. Ләкин, унда ике йыл уҡығандан һуң, ҡыуҙылар. Тик тормаҫ тел сәбәпсе булды. «Тәхеткә мендергән дә тел, төрмәгә индергән дә тел»,— тигәндәр боронғолар... Унан һуғышҡа алдылар. Тормош мине Карпат итәгенә тотоп ырғытты ла мине Кох таяҡтары менән бүләкләне...

Быны мин ни өсөн һөйләйем? Минең былай күп итеп бик күп йылдарҙан бирле һөйләгәнем юҡ. Гел генә тиерлек яңғыҙ йәшәнем мин. Ғәлиәлә уҡығанда ла шулай булды. Кешеләр шатланалар, уйнайҙар-көләләр. Бай ҡыҙҙарына өйләнеп, приказчик йәки мулла булалар, шунын менән үҙҙәренең йәшәү маҡсаты үтәлгән итеп һанайҙар. Мин уларҙы «паразиттар» тип атайым, ә улар мине «зимагор», «босяк», «диуана», «ахмаҡ» тип йөрөтә торғайнылар. Мине яратмай торғайнылар улар. Сөнки аҙым һайын осраған әшәкелекте, тышҡы яҡтан бөйөк идеялар өсөн янып йөрөгән һымаҡ күренеп һәм шул турала ҡысҡырып та, эстән тик үҙенең шәхси тормошо тураһында ғына уйлаған ике йөҙлөлөктө, тәбиғи булмаған ҡыланыуҙарҙы, ҡайҙа ҡарама шунда ялғанды күрә инем дә — түҙеп булмай торғайны, алды-артты уйлап тормай, һүгә торғайным. Был тормош бысраҡлығын мин нисек тә ситкә ырғытып бәрергә, һүҙҙәрем менән яндырып, көлөн күккә осорорға теләйем, ә ул һаман йәбешә, боғаҙҙан ала, быуырға теләй кеүек тойола...

Бер ваҡыт мин газетала репортер булып эшләп ҡараным. Мөхәррир булған кеше (бер атаҡлы байҙың кейәүе ине) менән тынышып булманы. Мине күрергә лә ярамай, йөҙөн йыйыра торғайны... Ҡыуып сығарҙы, әлбиттә.

...Һуғыштан ҡайтҡас, «тәүфиҡҡа килергә» димләй башланылар, һәм көндәрҙең берендә миңә мулла булырға тәҡдим иттеләр. Ә икенсе көндө иртәгеһен халыҡ араһында дини паразитизм тураһында һөйләгәнем өсөн становойға тотоп оҙаттылар...

Әллә нисек үтте ғүмер! Ни өсөн янды был йөрәк? Ҡайҙа булып бөттө йәшлектең ялҡыны? Дуҫтар ҙа юҡ, иптәштәр ҙә... Ә бит яңғыҙ йәшәргә, былай яңғыҙ ҡалырға теләмәгәйнем мин.

Мин һуғыштан ҡайтыуға, атай ҡарт үлеп китте, йәш ваҡыттан уҡ өйрәнгән столярлыҡ һөнәрем бар ине, шуға тотондом. Был эш миңә күп көс бирҙе...

Миңә ҡалала бер кеше:

— Ниңә тыуалар һинең һымаҡ кешеләр? Донъяла йәшәй белеүселәрҙең эстәрен бошороу өсөнмө? Ни аллаға, пи муллаға — артыҡ кеше һин! — тигәйне. Бер ваҡыт мин үҙем дә аптырабыраҡ ҡалғайным... Ләкин, аҙаҡтан төшөндөм! Мин бары тик намыҫлы кеше булып йәшәгәнем өсөн генә «нормаль» бәндәләргә «алйот», «артыҡ кеше» булып күренәм. Кешелек достоинствоһы, абсолют намыҫлылыҡ, белемгә, бөтә нәмәне аңлауға һаман алға ынтылыу, бер ни менән дә ҡәнәғәтләнеп ҡалмау — былар минең күңелемде күтәрҙеләр. Мин интеллигент-столяр булып ҡалдым.

— Ә бына һеҙҙең заманда инде тик тоғро кешеләр генә, хәҡиҡәт менән йәшәгән кешеләр генә, намыҫлы кешеләр генә өҫтөн булырҙар. Ялғансыларҙы, ике йөҙлөләрҙе, үҙҙәрен башҡа кешенән өҫтөн тоторға тырышыусы ғорур кешеләрҙе һеҙҙең заманда язаға тарттырасаҡтар. Ә мин шуны аңлауыма ғына ла шатланам! Ошо сиккә килеп еткәс тә, өмөттө өҙөргә теләмәйем... Йәшәйһе ине, күрәһе ине киләсәкте!..

Сарим ағай арыны. Оҙаҡ һәм ауыр итеп йүтәлләргә тотондо. Йөҙөнә сиктән тыш ғазапланыу билдәһе сыҡты. Ниндәй ауыр үткән ғүмер! Шулай ҙа киләсәктәге яҡты тормош тураһында һөйләп, шуға шатлана ала! Был үҙе бөйөк оптимизм түгелме ни?

Тап бына шул ваҡытта өйгә йәш кенә бер егет килеп инде. Егеттең шаулатып тын алыуы, күҙҙәренең ҙур асылып ғәжәпләнеүеме, ҡурҡыуымы — ни ҙә булһа ғәҙәттән тыш бер тойғо менән ҡарауы,— беҙҙе инстинктив рәүештә аяҡҡа баҫтырҙы. Мин уға:

— Ни бар? — тинем. Егет аяҡтарын алмашлап баҫты. Уң ҡулы менән маңлайын һәм сикәһен һыйпаны, ул тирләгәйне. Ҡырҡыулы түбән тауыш менән:

— Мәҙинә апайҙы... үлтерергә әҙерләнәләр, — тине ул.

Минең эстә ниҙер тартылып китте. Бәләкәй сағымда мин ҡараңғы төндә йәшенле ямғыр ваҡытындағы ҡапыл көслө шартлау моментында үҙемде шулай һиҙә торғайным... Сарим ағайҙың ҙур ҡара күҙҙәре алмашлап беҙгә ҡарайҙар, «һеҙҙә генә өмөт, егеттәр!» тигән һымаҡ тойола ине был ҡараш. Ә егет бер аҙ хәлләнеберәк, ләкин өшөгән һымаҡ ҡалтыраныуыраҡ дауам итте:

— Волость правлениеһы йортона йыйылғандар. Килтерегеҙ бында, тиҙерәк бөтөрәбеҙ, тиҙәр...

— Нишләйбеҙ? — тинем мин Сәхипкә.

— Башларға кәрәк! — тине ул ҡаты итеп. Беҙ артиллерист янына киттек.

## 10. БАШЛАП ЙӨРӨҮСЕЛӘР

Волость правлениеһы йортона алыҫ түгел, бер нисә өй аша Хафиз байҙың өйө тора. Үҙен боласыларҙың атаманы тип йөрөткән Имаҡаев Хафиз бай өйөнә урынлашып алған. Ишетелеүгә ҡарағанда, ул иртәгәләргә «ғәскәре» менән ҡала өҫтөнә ташланырға тора. Шуны әйтергә кәрәк: «ҡара ҡошсоларҙың» ошо Имаҡаев тигән бай малайы унтер-офицер, Ҡарағайлы муллаһы Хөснулла хәҙрәт, урядник Харламов, Хафиз бай һәм тағы ла бер нисә мулла һәм байҙарҙан торған «штабы» ни эшләргә әҙерләнә, ул шунда уҡ бөтә ауылға тарала торғайны. Сөнки өйҙән һөйәк-һаяҡ, сүп-сар сығарып ташламаҫтармы тип морондарын күтәреп көтөп торған эттәр һымаҡ, бында ла правление ишеге алдында һәр ваҡыт ун-ун бишләп кеше йыйылып тора. Былар

аҡырыусылар, башлап йөрөүселәр, бөтә төрлө әшәкелекте иң беренсе башлап эшләүселәр. Был «ҡара ҡошсолар» болаһының терәге. Халыҡты йыйырға кәрәк булһа, суҡмарҙарына таяналар ҙа урамдар буйлап тап бына ошо кешеләр китәләр. Большевиктарҙы, комсомолдарҙы, йәки ғөмүмән иҫкелеккә ҡаршы кешеләрҙе туҡмағанда ла беренсеударҙы ошо кешеләр төшөрәләр, башҡаларҙы димләйҙәр, туҡмауҙа ҡатнашмай тороусыларҙың үҙҙәрен туҡмай башлайҙар.

Беҙ барғанда ла бына ошо группа йыйылғайны. Теге егет,— Нурый ине уның исеме,— беҙгә был кешеләрҙең кемдәр икәнен әйтеп сыҡты. Беҙ уларҙы яҙып алдыҡ. Кемдәр генә юҡ ине былар араһында!

Бына ҡулына иҫкереп бөткән ҡуян мылтығы тотҡан, башына ҡуян папаха, өҫтөнә һарыға һуҡҡан ҡыҫҡа тун, аяғына һалдат итеге кейгән урта буйлы, ҡыҙыл сырайлы, һимеҙ битле йәш кенә кеше. Уның, самогонды күп эскәнлектән, күҙҙәре шешенгән, ҙур танауы күгәргән, тауышы ҡарлыҡҡан. Был кешенең бер ваҡытта ла билдәле бер эше булмай. Бөгөн Хафиз байға йомортҡа йыйып йөрөй икән, иртәгә һеҙ уны ҡалалағы толчокта иҫке-моҫҡо менән «һатыу» иткәнен, йә булмаһа берәй ауылда сепрәк, һөйәк,— ғөмүмән утиль йыйып йөрөгәнен күрәһегеҙ. Иҫке заманда ул ҡалала полицияла «шымсы» булып та йөрөгән. Ләкин сер тота алмағаны өсөн ҡыуып сығарылған тип һөйләйҙәр. Уны, просто ҡушаматы менән «Алдар» тип кенә йөрөтәләр. Был ҡушамат уға шул тиклем үҙләшкән, хатта уның үҙенә лә Алдар тип өндәшәләр. Ул быға асыуланмай.

Ә бына итсе Шәрәфулла. Был «бер һуғыуҙа юҡ итә торған» таҙа кәүҙәле, йыуан муйынлы, ҡыҫыҡ күҙле, ҙур һары һаҡаллы кеше — «бола башлыҡтары» араһында иң ҡанһыҙы, иң уҫалы. Ул кешене туҡмағанда, яйлап ҡына, бөтә иғтибарын биреп һуға. Үҙе туҡмай:

— Бына һиңә коммуна! Бынының һиңә оҙон сәсең өсөн! Бына бынының китапты күп уҡығаның өсөн! — тип һуға.

Йәки бына бер башлаусы, — оҙон буйлы, нескә генә кеше, һаҡалы аҙ ғына, бер-ике генә бөртөк, йөҙө бәләкәй һәм ябыҡ. Күҙҙәре зәп-зәңгәр һәм йәшләнеп торалар. Тауышы ла үҙе кеүек нескә, ҡайһы ваҡыт сыйылдап уҡ сыға. Был бер генә йоманы ла ҡалдырмай мәсеткә йөрөй торған Әхмәтвәли ҡарт. Ул «артыш таяҡҡа» таянған. Туҡмағанда ла шул таяғы менән туҡмай.

...Ғәжәп төрлөлөклө ине был группа! Беҙ яҙып алған исемлектә юғарыла күрһәтелгәндәрҙән башҡа ат ҡарағы (Ҡарағайлының үҙендә урламай), алкоголик лавкасы, тирмәндә «засыпкасы» булып тороусы берәү, мәзин малайы һәм әүлиялыҡ итеп йөрөүсе бер ҡарт бар ине. Улар һис туҡтауһыҙ ҡысҡыралар. Халыҡты йыялар. Бәлки, мең дә беренсе тапҡыр һаман бер һүҙҙе ҡысҡыралар:

— Тамырҙарын ҡоротоорға кәрәк, тамырҙарын!

## 11. БАШЛАНДЫ

Шулай итеп беҙгә матрос менән бергәләшеп эшләгән планды боҙоп, тик үҙ көсөбөҙгә генә ышанып, билдәләп ҡуйылған йома көндө түгел, ә кесаҙна көн башларға тура килде. Беҙ көтә алмай инек. Берҙән, Мәҙинәне үлтерергә ныҡлап әҙерләнгәйнеләр, икенсенән, иртәгә баҙарға тегеләр яҡлы кешеләр күп йыйыласаҡ ине. Беҙ быны иҫәпкә алып еткермәгәнбеҙ. Ә иң баш сәбәп — байҙар йыйылған игенде бүлеп алыу тураһында күп һөйләй башланылар. Быға тиклем теймәүҙәренең сәбәбе — «атаман» Имаҡаев: «Үҙебеҙҙең ғәскәр өсөн кәрәк булыр», — тип амбарҙарҙы астырмаған.

...Правлениенан, болдорона ҡулына винтовка тотҡан бер кеше килеп сыҡты ла, әсе тауыш менән:

— Рәхим ҡыҙы Мәҙинәне яндырырға булдыҡ! — тип ҡысҡырҙы.

Ишек алдында тороусылар араһында кемдең ни әйткәне аңлашылмай торған геүләү китте. Итсе Шәрәфулла үҙенең көр тауышы менән бөтә тауыштарҙы баҫып:

— Туҡмап ҡына үлтерергә ине! — тип ҡысҡырҙы.

Уйланып тора торған ваҡыт түгел ине. Бая һөйләшеп ҡуйған план буйынса, беҙ, Сәхип менән икәүләп, Хафиз бай йортона ташландыҡ. Унда егеүле пар ат көтөп тора ине инде. Оҙаҡламай беҙҙең кисәге танышыбыҙ Шакир ағай һәм, тағы ла бер нисә кешене эйәртеп, артиллерист Яҡуптар килеп етте. Нурый тигән егет ғәжәп батыр һәм уңғап булып сыҡты. Уны ла артиллерист алдап әҙерләп ҡуйған икән. Нурый сабыу аҫтынан сығарып беҙгә ҡаҙ йомортҡаһына оҡшаған бер нәмә күрһәтте. Был бомба ине! Беҙ ғәжәпләнеү һәм шатланыуыбыҙҙы тыя алмай көлөп ебәрҙек.

Икебеҙ ҙә берҙән:

— Ырғытырға беләһеңме? — тип һораныҡ. Нурый көлөп:

— Яҡуп ағай өйрәтте! —тине.

...Беҙ Хафиз байҙың ҡапҡа төбөнә барҙыҡ. Сәхип йортҡа инеп китте, мин, сигнал биреү өсөн, ҡапҡа төбөндә ҡалдым. Ул йортта утын ярып йөрөүсе йәш кенә хеҙмәтсе менән һөйләшә башланы, йорттоң артҡы мөйөштәренән береһендәге кескенә өй янында ҡуян мылтығы тотҡан бер кеше ары-бире йөрөнөп тора. Тимәк, Мәҙинә шунда ултыра.

Ҡарауылсы:

— Йә, самауырсылар, тартырға бармы? — тип ҡысҡырҙы. Тауышына, ҡыланышына ҡарағанда, был теге башлап йөрөүселәргә оҡшаған нахал һәм уҫал тип түгел кеүек күренә ине. Сәхип уның янына барҙы, улар тарта-тарта һөйләшә башланылар.

Күп тә үтмәне, волость правлениеһының болдоронда беҙгә күптән таныш Хөснулла хәҙрәт, унтер Имаҡаев, урядник Харламов һәм тағы ла бер нисә кеше күренде. Хөснулла хәҙрәт болдор алдында йыйылған толпаға ниҙер әйтте. Толпа бер яҡҡа ҡуҙғалды. Хөснулла хәҙрәттәр группаһы алдан төштө. Мин ҡул болғаным.

Сәхип ҡапыл һикереп ҡарауылсының мылтығын тартып алды ла тегене төртөп йыҡты: хеҙмәтсе балтаһын күтәреп мунса яғына ташланды. Мин, был ҡәһәр төшкөрө ялсы Сәхиптең башына ҡундыра икән инде, тип атмаҡсы булып маузерҙы сығарыуым булды, ялсы, Сәхиптең алдына уҡ сығып, мунсаның ишек яғына ташланды. Мин «Беҙҙең кеше!» тип ниҙер ҡысҡырып ҡуйҙым. Өйҙән ҡатын-ҡыҙ фигуралары сығалар ҙа йәшеренәләр. Шунда уҡ бик ҡаты тимергә тимер һуғылып шаҡылдау, Сәхиптең «Мәҙинә! Сығығыҙ!» тигән тауышы ишетелде. Ҡарауылсы йүгереп амбар артына ҡасты. Минең хәҙер ҡапҡа төбөндә тороуымдың кәрәге юҡ ине; мин дә мунса яғына ташландым. Барып еттем, мунса ишегенән ялт итеп Мәҙинә килеп сыҡты. Беҙ уны ике яҡтан да етәкләп урамға саптыҡ. Сәхип мылтыҡты Мәҙинәгә бирҙе, беҙҙең икебеҙҙең дә ҡулда маузерҙар ине. Ялсы, балтаһын ҡулынан ыскындырмай, беҙҙең арттан эйәрҙе.

Беҙ урамға сығыуға, боласылар ҙа бында етеп киләләр ине. Күп булһа егерме аҙым ҡалғандыр. Беҙ барыбыҙ ҙа санаға ташландыҡ һәм атты һуҡтырып урам буйлап сабып киттек. Боласылар һиҙеп алып беҙҙең арттан ташландылар. Имаҡаевтың асыулы олоған тауышы ишетелде. Ул яҡтан ата башланылар. Хатта мин пуляның һыҙғырып үткәнен ишеткән кеүек булдым. Беҙ бер-беребеҙгә ҡарашып алдыҡ. Шундай ҡайнар, ялҡынлы ҡараш ине был. Атта сабып барғанда, һүҙһеҙ булған был ҡараштарыбыҙҙы мин бер ваҡытта ла онотмам! Беҙ дүрт кеше — өс егет

һәм бер ҡыҙ,— бер туғандарҙан да яҡын инек! Мин, Мәҙинәнең йылмайған йөҙөн, ҡара, ҙур күҙҙәрен күреп, уның һылыулығы алдында ғәжәпкә ҡалдым. Имаҡаевтың Мәҙинәне кисә үк үлтереүселәргә бирмәй тороуының серен аңлап алдым. Ләкин Мәҙинәлең йөҙөндәге һәм күҙҙәрендәге сикһеҙ шат йылмайыу, һис бер төрлө ҡайғы, һағыш билдәһе булмауы мине тынысландырҙы.

Беҙ бер нисә урамды үтеп, әйләнеп-тулғанып, Сарим ағай йортона килдек. Дүртебеҙ ҙә таш амбарға ташландыҡ. Мәҙинәгә ялсы менән бергә күрше ауылға китергә тәҡдим иттек.

— Бәлки матросты табып алырһығыҙ!— тине Сәхип. Ләкин ҡыҙ риза булманы: Һеҙ ни күрһәгеҙ, мин дә шуны күрермен, иптәштәр!—тине. Һәм беҙ өсәүләп иҫке, таш амбарға инеп йәшеренергә булдыҡ. Ялсы шул уҡ ат менән матросты эҙләргә сыҡты. Мәҙинә, ағайымды күреп сығайым әле тип, өйгә инеп китте. Ул арала боласыларҙың геүләүе яҡынайғандан яҡынайҙы. Мәҙинә йүгереп өйгә инеп китте. Сәхип менән беҙ иҫке амбарҙың ишеген тартҡылай башланыҡ. Ләкин ишек тиҙ генә бирелмәне. Уның менән оҙаҡ маташырға тура килде. Боласыларҙың тауыштары яҡында уҡ ишетелде.

— Һин аса тор, мин яҡын килтермәй ҡапҡа бағанаһына ышыҡланып атып торайым,— тине Сәхип. Ул ата башланы. Тауыш көсәйҙе, тәртипһеҙ ҡысҡырыныуҙар, геүләү менән бөтә ауыл өҫтө яңғыраны. Боласылар яғынан да бер нисә тапҡыр аттылар.

Мәҙинә йүгереп сыҡты. Беҙ ишекте икәүләп тартырға тотондоҡ. Аҙаҡ килеп, ике яҡҡа айырылып асыла торған тимер ишектәр ҡуҙғалдылар. Беҙ эскә индек.

Мәҙинәнең йөҙө борсоулы һәм ҡайғылы ине. Миңә уның ирендәре ҡалтыраған кеүек күренде.

— Һеҙҙең патрондарығыҙ бармы һуң? — тип һораны ул.

— Ҡайғырмағыҙ,— тинем мин.— Һеҙҙең күрше Якуп ағай бер нисә кеше менән волоста хәҙер пулеметты алырға тейеш. Ә беҙ бында бандиттарҙың иғтибарын тартып торасаҡбыҙ. Беренсе моментта улар пулемет тураһында бәлки уйламаҫтар ҙа, сөнки унда беҙҙең кешеләр барлығын белмәҫтәр. Ә пулеметты эләктергәс инде — еңдек тигән һүҙ!

Ләкин эш беҙ уйлағанса анһат булып сыҡманы...

Мин дә ҡапҡа төбөнә ташландым, боласылар хәҙер ҡапҡаға яҡын килергә ҡурҡалар. Шулай ҙа ҡойма буйлап ҡарҙы соҡоп килгән бер нисә фигура күренә ине. Ул арала булманы, Мәҙинә:

— Амбар яғынан ситән аша инәләр!—тип ҡысҡырҙы. Шул уҡ секундта арттан мылтыҡ атыу ишетелде. Беҙ ашығып амбарға ташландыҡ. Ә боласылар йортҡа тула башланылар. Бына береһе ишек янында уҡ күҙгә сағылып ҡуйҙы. Мин берҙе атып ебәрҙем.

— Эттәр ана ҡайҙа ҡасҡандар!

— Бына һиңә самауыр төҙәтеүселәр! Ҡайһыһылыр әсе тауыш менән:

— Амбарҙың түбәһен емерегеҙ!—тип ҡысҡырҙы. Был теге мәсет ҡартының тауышына оҡшағайны. Шул минутта түбә ҡалайы дөбөрҙәй башланы. Шау-шыу, геүләү аралаш көслө шартлау ишетелде. Был һис шикһеҙ беҙҙекеләрҙең бомба тауышы ине.

— Ишеттегеҙме? — тине Сәхип. Күңел күтәрелеп киткән һымаҡ булды. Мәҙинә лә хәҙер өмөтлө ҡарай ине. Уның һылыу йөҙөндәге ҡайғы шәүләһе юғалған. Бер генә секундҡа минең күҙ алдыма беҙҙең ҡалалағы комсомолкабыҙ Клавдия Малиновскаяның мине аҡылдан шаштыра торған һылыу фигураһы һәм һылыу йөҙө, һарғылт бөҙрәләре килеп баҫты.

— Ниндәй һылыу, ниндәй батыр беҙҙең кешеләр!— тип уйланым мин.

## 13. ҮЛЕМ ҠУРҠЫНЫСЫ АҪТЫНДА

Амбарҙың ишек асыҡлығына килеүҙән мәхрүм булған боласылар түбәне емерергә тотондолар. Шул ваҡытта өй ишегенән Сарим ағайҙың ҡар кеүек аҡ эске бельела ҡалтыранған кәүҙәһе болдорға сығып баҫты. Ишек яңағына тотоноп, ул:

— Ағайҙар, энеләр! Нишләүегеҙ һеҙҙең. Был йәштәр донъяла иң намыҫлы кешеләр! Ни өсөн үлтерәһегеҙ уларҙы! Улар беҙҙең барыбыҙҙың да бәхетебеҙ өсөн йөрөйҙәр. Үтенәм мин һеҙҙән...— тип ҡысҡырҙы. Был ҡысҡырыу өсөн ул, күрәһең, барлыҡ көсөн йыйғайны булһа кәрәк, шулай ҙа уның тауышы алыҫ китә алманы, тик яҡын тирәләгеләргә генә ишетелерлек булды. Ул һул ҡулы менән ишек яңағына тотоноп уң ҡулын юғары күтәрҙе:

— Барыбер улар еңәсәктәр!

— Ағай! Инеп кит хәҙер өйгә!—тип ҡысҡырҙы Мәҙинә.

Атыу тауышы гөрһөлдәне. Болдорҙағы аҡ фигура стенаға һөйәлде һәм, аҡрын ғына шыуышып, баҫҡан урынына ултырҙы. Башы бер яҡ яурынынаауҙы. Ул йоҡлаған һымаҡ шундай позала ҡатып ҡалды.

Мәҙинәнең күҙҙәре ҙур асылдылар. Ул, бер минут самаһы, аҡайған күҙҙәре менән болдор яғына ҡарап торҙо ла, ҡапыл тышҡа ташланырға теләгән һымаҡ хәрәкәт яһаны. Мин уны, беләгенән тотоп, бер мөйөшкә алып килдем.

— Аҡылһыҙланмағыҙ!

Ул ауыр ыңғырашты. Күҙҙәренән йәш бөртөктәре атылып сыҡтылар ҙа, хрусталь борсаҡтарға оҡшап, береһе артынан береһе йүгерешеп, уның хәсрәттән ағарынған битен сылаттылар.

— Ни өсөн аттылар уны! —тине ул, үкһеп. Үҙ күҙ йәштәренән үҙе оялғанлығы күренеп тора һәм ул уларҙы йәшерергә тырыша ине.

— Улар һеҙҙе лә аткан булырҙар ине,— тине Сәхип уның ҡалтыранған яурынына ҡулын һалып.— Беҙгә йәшәргә кәрәк әле... Ә Сарим ағай өсөн былдай тиҙ үлем, пожалуй, яҡшыраҡ та...

Мин Сәхипкә асыулы итеп ҡараным. Был һүҙҙәр сиктән тыш ҡаты кеүек ишетелде. Ләкин, ҡаты булһалар ҙа, хаҡ һүҙҙәр ине.

Бынан һуңғы ваҡиғалар ғәйәт тиҙ булып үттеләр. Әллә йөҙәрләгән кеше амбарҙың түбә ҡалайын емереп ташланы. Теге яҡтан да, был яҡтан да беҙгә ҡоторонған күҙҙәр, мылтыҡ көбәктәре, һәнәк, суҡмарҙар ҡаранылар. Боласыларҙың баштары күренеп кенә ҡалалар ҙа юғалалар. Беҙ күргән һайын уларға атып ҡалабыҙ. Түбәне бөтөнләй емереп ташланылар. Улар ура ҡысҡырып ишектән, стеналар аша юғарынан беҙҙең өҫкә ябырылдылар.

Күҙ асып йомғансы өсөбөҙҙөң дә ҡулдарыбыҙҙы артҡа бәйләнеләр. Урамға алып сыҡтылар. Өҙлөкһөҙ шау-шыу, ҡысҡырышыуҙы баҫып, көслө тауыш:

— Өсәүһен дә утҡа һалығыҙ! Әйҙәгеҙ баҙар майҙанына! Унда ут яғылған! — тип ҡысҡырҙы. Шунда беҙҙең «мастерскойыбыҙ» яғынан гармун тауышы ишетелеп ҡалды.

— Гармуным...— тип ыңғырашты Сәхип.— Рөхсәт итегеҙ... бер уйнап ҡалайым гармунымды...— тине ул. Был һүҙҙәрҙе ҡурҡынған һәм ялыныулы итеп әйтте, ләкин уның был ҡыланышы яһалма икәне әллә ҡайҙан күренеп тора. Ысынында ул ҡурҡҡанға һис тә оҡшамаған, йөҙөндә һис бер төрлө үҙгәреш юҡ. Мин аңлайым. Ул ваҡытты һуҙырға теләй.

Беҙҙең алға таныш бер кеше килеп сыҡты. Уны беҙ бер көндәрҙе ҡала баҙарында тота алмай ҡалғайныҡ. Ҡара һаҡаллы йөҙҙә һыңар күҙ

үтә тишерҙәй булып текләп ҡарай. Бер күҙе урынында ҡыҙыл соҡор. Уны күргәс тә, тән сымырҙап китте.

— Ә, минең иҫке таныштар! Беҙҙең яҡҡа ла килеп сыҡҡан икәнһегеҙ! — тине ул аҡ матур тештәрен ыржайтып. Минең башҡа «тәмәке тартмай икән» тигән уй килеп китте.

— Уйнаһын әйҙә! — тип ҡысҡырҙы кемдер.

Сәхипкә гармунды килтереп тотторҙолар, ҡулдарын ысҡындырҙылар.

Ул уйнай башланы...

Был көслө, сикһеҙ моңло, шул уҡ ваҡытта өмөтлө һәм нәмәгәлер саҡырыусы музыка миңә таныш ине инде. Әле генә үлемдең ҡара, һалҡын шәүләһе аҫтында ҡыҫылған йөрәк елкенеп китте... Бөгөн беренсе тапҡыр күккә, ҡояшҡа ҡараным. Ә бит күңелле икән бөгөн көн! Шундай йылы, яғымлы ҡарай ҡояш!

Мәҙинәгә ҡараным. Ул Сәхипкә ҡараған да ҡатҡан. Хатта аҙ ғына йылмайған да кеүек күренә.

Тирә-яҡтағы кешеләрҙең дә йөҙөндә мин шул уҡ иғтибарлы тыңлау, уйсанлыҡ, ә ҡай берәүҙәрендә моң күрҙем.

Бала күтәргән бер йәш кенә ҡатын Сәхиптең алдына сығып баҫты. Уның йөҙөнә оҙаҡ ҡарап торҙо. Шәл ябынғайны ул, мин уның күҙҙәрен күрә алманым.

Сәхип туҡтаны. Кешеләр бер аҙ тын торҙолар. Теге ҡатын балаһына:

— Һинең атайың да шулай матур итеп уйнай торғайны... — тип ҡуйҙы. Был тауышта шул тиклем моң, тәрән ҡайғы яңғыраны, — ул миңә бик, бик яҡын кешем кеүек тойолдо.

Ҡапыл тауыш тағы ла күтәрелде.

— Ну, булды! Марш! Собакалар! — тип ҡысҡырҙы һыңар күҙле.

— Һин үҙең эт! Ә беҙ честный РКСМ члендары, — тине Сәхип һыңар күҙлегә. Сәхиптең һул ҡашы һикереп ҡуйҙы, ирендәре ҡалтыранды. Үҙенә сикһеҙ асыу ҡуҙғата ине һыңар күҙле бандит!

— Теймәгеҙ уларға! — тип ҡысҡырҙы балалы ҡатын. Ул минең яҡҡа боролдо. Дөрөҫ һыҙатлы, түңәрәк аҡ йөҙлө, һоро күҙле был ҡатын истерикалы итеп илай башланы.

- Ниндәй зыяндары тейгән уларҙың? Теймәгеҙ бахырҙарға!

Шунда кемдер Мәҙинәне төртөп ебәрҙе, ул йығылғас, кемдеңдер итекле аяғы уның арҡаһына типте. Әллә ҡайҙан, алыҫтан уҡ бер ир кеше тауышы:

— Ебәрегеҙ үҙҙәрен! — тип ҡысҡырҙы.

Минең алдымда ҡуян мылтығы тотоп торған, һаҡалһыҙ һимеҙ битле, ҡуян папахалы бер кеше мылтыҡтың приклады менән миңә киҙәнде. «Алдар» тигән уй килде башҡа. Шул уҡ секундта һыңар күҙле ҙур бысаҡты йылтыратып Сәхиптең муйын төбөнә ҡаҙаған кеүек булды. Минең баш һөйәге дөп итеп йәнселгән һымаҡ тойолдо, өйҙәр, кешеләр әйләнә башланылар... Шунда мин пулемет тыҡылдағанын ишеткән кеүек булдым...

## 14. ФИНАЛ

Күҙемде асып ҡарау менән, бер минут самаһы ҡайҙа икәнлегемде, ниндәй кешеләр араһында икәнлегемде аңлай алмай яттым. Башҡа беренсе килгән нәмә — ҡояштың йылы ҡарауы, донъяның яҡтылығы тураһындағы тәьҫир булды, йөрәкте ниндәйҙер сикһеҙ яғымлы йылылыҡ солғап алған кеүек булды. Был — йәшәү шатлығы ине, күрәһең... Тирә-яҡта ғәжәп тәртипһеҙ шау-шыу, геүләү ҡалтыранып тора. Ҙур ҡара күҙле матур бер ҡыҙ миңә ҡараған да — йылмая. Ниндәй матур был ҡыҙ!

Күрәһең, мин төштә күрәм. Ана Сәхип ҡулын болғай-болғай низер ҡысҡыра. Уны үлтергәйнеләр бит әле! Әй, Сәхип!

Мин ҡысҡырырға теләйем, ләкин тауышым сыҡмай... Әлбиттә, төш күрәм! Бына беҙҙең артиллерист Яҡуптың ҙур, көслө кәүҙәһе, ағас аяғы менән дөпөлдәп, әллә нишләп йөрөй. Уның ҙур ғына, ләкин килешле танаулы оҙонса аҡ йөҙө бына был матур ҡыҙ кеүек үк йылмая. Ә был ҡыҙҙың исеме Мәҙинә түгелме һуң әле? Шул, шул!

— Башығыҙ бик ныҡ ауыртамы? — ти ул ҡыҙ миңә таныш һәм яҡын тауыш менән. Үҙе минең ҡулдан тотҡан.

Мин, башымды күтәреп, тирә-яғыма ҡарайым. Мине дүрт-биш кеше яйлап ҡына күтәргән дә әллә ҡайҙа алып бара. Ҙур майҙанда ниндәйҙер ҙур бер йәшник өҫтөнә баҫҡан матрос Охрименко, ҡулын юғары һуҙып, болғап ҡысҡыра:

— Йәшәһен иптәш Ленин!

— Төшөрөгөҙ мине, ебәрегеҙ!— тип ҡысҡырҙым мин, түҙемһеҙләнеп сәбәләнә башланым.— Миңә бер ни ҙә булмаған. Ниңә күтәреп йөрөтәһегеҙ!

— Булған шул! Бик ашыҡма әле улай, егет. Был Шакир ағай. Мине аяҡҡа баҫтыралар, ҡултыҡлайҙар.

— Майҙанды ташлап китергә теләмәйем,— тип мығырҙанам мин. Башты бәйләгәндәр. Сикәлә ҡан төйөр-төйөр булып ҡуйырған да бармаҡҡа елем кеүек йәбешә...

Минең алға киң йылмайып Сәхип килеп баҫты. «Ул тоже үлмәгән!» тип уйлайым мин шатлығымды эсемә һыйҙыра алмай.

— Уяндыңмы? Ныҡ ултыртты шул сволочь! Ә мине бына Шакир ағай теге һыңар күҙҙең бысағынан ҡотҡарып ҡалды. Тик бына үҙе ҡасып китте, тотоп булманы этте!

— Ә beləhеңме,— тип ҡапыл әйләнеп китте ул,— Имаҡаев үҙен үҙе атып үлтергән! Аҙаҡҡы патронына тиклем пулемет эргәһенән китмәгән. . Сволочь! Хәҙрәт тә ҡасып ҡотолған, тәре күҙ! Ауылдан бер ҡайҙа ла китмәгән инде ул... Йәшерәләр... «Хәҙрәт» имеш... Ваҡ буржуа стихияһы... Хөснулла хәҙрәтте ҡулдан ысҡындырыу һис ярай торған эш түгел. Ул һау ҡалһа, киләсәктә беҙгә аҙ зыян булмаҫ...

Халык шаулай, гөр килә. Кемдәрҙер, «Әй, хохол! Ни хәл!», «Хохол дуҫ! Бына ниндәй телгә оҫта быяласы икәнһең үҙең!» тип ҡысҡыралар. «Волосҡа үҙебеҙҙең йәнүәлит Яҡупты һайлайбыҙ!», «Сәүит һайлайбыҙ!» тип ҡысҡыралар.

Халыҡ диңгеҙе, тулҡынланып, сайҡалып волость яғына ҡуҙғалды. Иң алда ҡулдары артҡа тартып бәйләнгән «башлаусылар» һәм улар артында мөһабәт ҡара һаҡаллы, аҡ матур йөҙлө Хафиз бай үҙенең алдына ҡараған да, кәүҙәһен төҙ генә тотоп, атлай. Уның эргәһенән уның кеүек үк таҙа кәүҙәле «Алдар» бара. Ләкин быныһы башын әле теге яҡҡа, әле был яҡҡа бора, ерәнгес нахаллыҡ менән көлә.

Шакир ағай, бер яҡлап, башын эйеберәк барҙы ла ҡаты итеп Алдарҙың сикәһенә һуҡты.

— Һуҡмағыҙ! Беҙ ҡул менән хөкөм итмәйбеҙ!— тип ҡысҡырҙы матрос.

— Нисек һуҡмайһың инде был дуңғыҙға!— тип асыулы тауыш менән мығырҙанды Шакир ағай.

Тирә-яҡта өҙлөкһөҙ шау-шыу, геүләү дауам итә. Ләкин мин һүҙҙәрҙе тыңламайым. Йөрәкте иге-сиге булмаған шатлыҡлы дәрт солғап алған. Әйтерһең, бына ул яғымлы яҙғы ҡояштың йылы нурҙары минең битте генә түгел, йөрәкте лә йылыталар... Тирә-яғымда әллә ни саҡлы йылмайған йөҙҙәр күрәм. Былар — беҙҙең кешеләр...

Мин уларҙың береһенең ябай уйсан йөҙөнә ҡарағанмын да ниндәйҙер тәрән мәғәнәле, ҙур әһәмиәтле һүҙ әйтергә теләйем. Ләкин һүҙҙәр минең хистәр ташҡынын һыйҙырмай торған ябай булып сығалар:

— Ниндәй яҡшы көн бөгөн!